✓*Сенаторҙарға алдан әҙерләп ҡуйған ҡағыҙҙарҙан уҡып һөйләргә түгел, ә үҙ һүҙҙәре менән аңлатырға ҡушам. Һәр береһенең ахмаҡлығын күрер өсөн.*
*(Петр I).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 СЕНТЯБРЬ
1 ОКТЯБРЬ
(ҺАРЫСАЙ - ҠАРАСАЙ)
2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №39 (405)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Халыҡ ҡурҡышы...**
хаҡтарҙы арттыра



2

**Уңышты янында тотам, тиһәң...**
кеше кәйефенә бармаҡ аша ҡарама



6

**Венгрҙар тарихи тамырҙарын аҡтара...**
донъяның глобалләшеү гәрәсәтендә юҡҡа сыҡмаҫ өсөн



8-9

**Интернет селтәрҙәренә инеп...**
файҙа алаһыңмы, әллә зыянмы?





12

14 **ТВ-программа**


БЕРҘӘМЛЕКТӘ - КӨС

# ТОРАТАУ ТОРАСАҠ ҺӘМ...

## был биләмәлә биологик, экологик, геологик, этно-мәҙәни ҡурсаулыҡ буласаҡ!

*Хәбәр иткәйнек инде: үткән шәмбелә Ишембай районы биләмәһендә уникаль тәбиғәт комарткыһы Торатауҙы һаклау буйынса сираттағы акция булып үтте. Ишембайҙар ғына түгел, республиканың төрлө райондарынан, калаларынан өс меңгә якын халык йыйылғайны, хатта Татарстан, Пермь башкорттарынан вәкилдәр килеп еткәйне. Акцияны алып барыусылар шулай ук Краснодар, Ханты-Манси, Силәбе, Себер тарафтарынан Торатауҙы һаклау буйынса теләктәшлек белдергән телеграммаларҙы укып ишеттерҙе. Шулай ук республика кимәлендәге йәмәғәт ойошмалары - Бөтөн донъя башкорттары королтайы башкарма комитеты, "Урал" башкорт халык үҙәге, "Ак тирмә" милли мәҙәни үҙәге, Башкорт катын-кыҙҙары, Башкортостан катын-кыҙҙары, "Молодая Башкирия" йәмәғәт ойошмалары, Башкортостанда йәшәүсе чечендарҙың "Барт" ойошмаһы лидерҙары тәбиғәт комарткыһының яклаусылары булып сығыш яһауын белдерҙе. Ә инде сарала Ишембай муниципаль районы хакимиәте башлығы Марат Ғайсиндың һәм БР тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары Әхәт Шаһиевтың катнашыуы һәм сығыш яһауы Торатауҙы яклаусыларҙың берҙәм көс икәненә ышандырҙы. Был көс сығыштарҙа былайырак яңғыраны:*

**(Дауамы 15-се биттә).**



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ХАЛЫҠҠА ЯҠЫН БУЛЫУЫ ЯҠЫН

Бына нисәмә йылдар инде Әбйәлил районы халҡы телендә тик "Киске Өфө" гәзите. Унда яҙылған ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, фәһемле ваҡиғалар ҡат-ҡат һөйләнә, телдән-телгә күсә. "Киске Өфө" лә яҙылған бит!" тип йөпләп ҡуялар һүҙҙәрен күптәр. Был республикабыҙ гәзит-журналдары араһында "Киске Өфө" лайыҡлы рәүештә беренсе баҫҡыстарҙы биләй икәнен раҫлай. Журналистар матур, актуаль, заман талабына ярашлы, көн үҙәгендәге мәсьәләләрҙе яҡтырта. Бөтөн һорауҙарға ла яуап табып була бында. Темалар төрләнеше гәзитте байыта, зауыҡлы итә. Ундағы һәр рубрика халҡыбыҙға, Башҡортостанға кәрәкле һәм фәһемле материалдар тупланмаһы ул.

**Гөлшат ЛАВРЕНОВА, Әбйәлил районы хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы етәксеһе.**

◆ ◆ ◆



Бөрйән районы халҡы ла яратып ҡабул итте был баҫманы. "Киске Өфө" бай йөкмәткеле, мәғлүмәтле, рухи тәрбиә биреүсе, йәшәйешебеҙгә битараф булмаған халыҡсан гәзит. Республикабыҙҙа барған хәл-ваҡиғаларҙы йөрәге аша үткәреп, уҡыусы йөрәгенә үтеп инерлек итеп яҙа белә журналистары. Улар ваҡиғаларҙы теркәүсе йә ситтән күҙәтеүсе генә түгел (ҡыҙғаныска ҡаршы, күп мәғлүмәт саралары журналистары бөгөн ошондай ғына ролдә), ә уларҙы анализлаусы, уҡыусыларына аңлатып биреүсе лә. Бик кинәйәләп ғаилә, мосолман тәрбиәһен, мәҙәниәтебеҙ, тел мәсьәләһен дә күтәреп сыға журналистар. Ҡыҫҡаһы, йәштәр ҙә, ололар ҙа ҡабул итерлек мәҡәләләр баҫҡан уҡымлы гәзит ул "Киске Өфө".

**Клара ТЕЛӘҮБАЕВА, Бөрйән районы хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы етәксеһе.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШТӘРЕБЕҘ!

**Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Унаң үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм гәмен уята алырлыҡмы?**

Шулай итеп, үҙебеҙҙең алға ошо һорауҙарҙы ҡуйабыҙ һәм 2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылырға саҡырабыҙ һеҙҙе. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы енер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ.

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп, 2011 йылдың тәүге ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 330 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ, ә предприятие һәм ойошмалар өсөн тәғәйенләнгән индексыбыҙ - 50673, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**



СӘЙЕР ҠАНУНДАР



# ХАЛЫҠ ҠУРҠЫШЫ...

## хаҡтарҙы арттыра

**Рәсәйҙе аҡыл менән аңлап булмай, тиһәләр ҙә, бер аҙ күҙәтеүсәнлек һәм аҙ ғына тәжрибәң булһа, алда торған үҙгәрештәрҙе күҙалларға мөмкин. Сәйәси ваҡиға көтөлһә - Үҙәк тиҙ генә аренаға "король шуты" булған Жириновскийҙы сығарып баҫтырып, унаң аша пландарын еткерә лә, халыҡ ҡәнәғәтһеҙлек белдерәме, юҡмы, тип шым ғына көтөп тора.**

Төрлө психик сирҙәрҙең яҙлы-көҙлө ҡатмарлашыуы - төрлө пикет-митингыларҙы ойоштороуға сәбәп булып тора. Әгәр ҙә дәүләт хаҡтарҙы арттырырға ниәтләй икән, пенсионерҙарҙың пенсияһына "хәйер" ташлай...

Быйылғы ҡоролоҡ иһә ябай халыҡҡа баш ауыртыуы булһа, сауҙа өлкәһе өсөн - табыш ҡына. Сөнки улар башҡалар иҫәбенә байып ҡала. Ярай, ауыл халҡы өсөн бик һиҙелмәйҙер, әммә ҡала халҡы тоҡлап йыллыҡ запасын йыя башланы. Һәр хәлдә, Рәсәй төбәктәрендә шундай күренеш күҙәтелә. Прилавкаларҙан төрлө ярмалар, он юғала. Ә ихтыяж ...хаҡтарҙы күтәрә лә инде.

Рәсәйҙәрҙе бөгөн генә түгел, ғөмүмән, ғүмере дауамында бер һорау борсой: ни өсөн ауыл хужалығы продукцияһын осоҙ хаҡҡа һатып алалар, ә магазин кәштәләрендә уларға буй етмәҫлек хаҡ ҡуйыла? Әлеге ваҡытта ни өсөн игендең хаҡы арзаная, ә аҙыҡ-түлек ҡиммәтләнә, тигән һорау күтәрелә. Ғөмүмән, халыҡтың аҡсаһы ҡайҙа китә? Ғәмәлдә, һәр тауар етештереүсенән үҙхаҡы менән сыға, магазин кәштәләренә килеп еткәнсе, һатыусылар уға күмәртәләп хаҡ өҫтәй, транспорт, һаҡлау, эшкәртеү, уты, һыуы һ б. тигәндәй, һуңынан инде ваҡлап һатыусы ла үҙ хаҡын өҫтәп сығарып ҡуя. Баҙар ҡанундары шундай, шулай булған, һатып алыусы булғанда киләсәктә лә шулай буласаҡ. Мәҫәлән, Рәсәй иген фонды президенты Аркадий Злочевский әйтеүенсә, бер түтәрәм икмәктә иген өлөшө 15 процент ҡына (он итеп тарттырыуҙы ла ҡушҡанда, 20 процент самаһы булалыр). Күпселек өлөштө энергетикаға, транспорт сығымдарына, эш хаҡына түләү алып тора. Быға тағы бихисап сәбәптәрҙе өҫтәргә мөмкин. Быйыл велосипед уйлап табыу кәрәкмәй, барыһы ла ҡоролоҡҡа һылтана. Ә белгестәр әйтеүенсә, бынан ике йыл элек игенгә хаҡ тоннаһына 9 мең һум күләмендә билдәләнһә, хәҙер ул алты мең һум самаһында. Тимәк, ондоң хаҡы ла пропорциональ рәүештә төшөргә тейеш. Әммә ошо ике йыл ярым эсендә икмәккә хаҡ кәмемәгән, киреһенсә, 20 процентҡа артҡан. Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығының һуңғы фаразлары буйынса, быйыл ҡоролоҡ ҡамасаулаһа ла, ил буйынса 60-65 млн. тонна иген йыйып алыу күҙаллана. Шулай булған хәлдә лә, элеке запастар илде туйҙырыуға етә. Әгәр икмәккә, икмәк изделиеларына хаҡ арта икән, тимәк, ниндәйҙер монополистың кәсәһе ҡалыная.

Ә бына һөт һәм ит продукцияһына килгәндә лә хәлдәр шул сама. Аномаль эҫелек һөҙөмтәһендә һауым 25 процентҡа тиклем түбәнәйеп, уға һорау, киреһенсә, 12 процентҡа артһа, бында ла хаҡтарҙы көйләүгә ихтыяж тәьҫир итә: һөт продукттары 2,5 -3 процентҡа ҡиммәтләнһә, ҡайһы бер эшкәртеүселәр 20 процентҡа тиклем күтәрә. Ит, киреһенсә, мал аҙығы наҡыҫлығы сәбәпле, ҡиммәтләнмәҫкә тейеш кеүек. Сөнки ауыл халҡы мал башын күпләп ҡыҫҡарта һәм уларҙы осоҙ хаҡҡа һата. Әммә алыпһатарҙарҙың аппетиты бер асылһа, иткә хаҡ артмаһа ла, кәмемәҫкә лә мөмкин.

Бөгөн иң актуаль мәсьәлә булып ярмалар тора. Әлеге ваҡытта ҡарабойҙай ярмаһына хаҡтар ҡапыл күтәрелде. "Үкенескә күрә, икенсе йыл рәттән ҡарабойҙай уңмай", - ти "Мистраль" (брендлы ҡарабойҙай етештереүсе) компанияһының бренд-менеджеры Юлия Котельникова. Шуға ла был төр ярманың хаҡы артабан да 70 һумдан кәм булмаҫ, моғайын.

Ҡарабойҙай ажиотажы башҡа ярмаларға ла һорау тыуҙырҙы. Һөҙөмтәлә тиҙ генә дөгө ярмаһының хаҡы күтәрелде, хатта тары менән геркулесҡа ла 10 процентҡа хаҡ күтәрелде. Дөгөгә килгәндә инде, Пакистан менән Ҡытайҙағы һыу баҫыуҙар унышҡа йоғонто яһаһа, ысынлап та, хаҡтар төшмәүе лә ихтимал.

Нисек кенә булмаһын, хаҡтарҙың артыуына төрлө сәбәптәр йоғонто яһай. Шуларҙың иң осоҙо һәм монополистарға, ретейлерҙарға аҡса килтергәне - халыҡтың аслыҡтан ҡурҡыуы, ажиотаж тыуҙырыуы. Шуға, бәлки, йыллыҡ запас туплап, һуңынан ҡортлатып сығарып түккәнсе, бәлки, айыҡ аҡыл менән эш итергә кәрәктер. Аҡса бит баҡса емеше түгел, һәр беребеҙ уны тир түгеп таба, шуға ул буштанбушҡа кеше кәҫәһенә инеп ятмаһын ине.

**Зәйтүнә САЛАУАТОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов БР Хөкүмәтенең 2007-2010 йылдарға Башҡортостан халҡының йәшәү кимәлен күтәреү программаһының тормошҡа ашырылыуын йомғаҡлаған ултырыш үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, уртаса айлыҡ эш хаҡы кимәле буйынса беҙ Рәсәй менән сағыштырғанда 20 процентҡа артта ҡалғанбыҙ, тормош сифаты күрһәткесе буйынса 18-се урындабыҙ. Эшһеҙҙәрҙең 25 процентын 16-29 йәшлектәр тәшкил итә. Башҡортостан былтыр Рәсәй Федерацияһында уртаса айлыҡ эш хаҡы буйынса 36-сы урынды биләгән. Ә ауыл халҡының 45 проценты алты мең һумдан аҙыраҡ эш хаҡы ала.

✓ Башҡортостандың иң бай һәм иң ярлы ҡатламы араһындағы упҡын тәрәнәйә бара. 2007 йылда яҡшы тәьмин ителгәндәрҙең килеме ярлыларҙыҡынан 17,7 тапҡырға күберәк булһа, 2009 йылда был һан 18,6 тапҡырға еткән. Былтыр республика халҡының 11,2 проценты, йәғни 455 мең кеше фәҡирлек сигендә торған.

✓ Башҡортостандың күпселек вуздарында Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерлек буйынса курстарға яҙа башлағандар. М. Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында әйтеүҙәренсә, уҡыу йортонан бюджет урындарына уҡырға инеүселәрҙең 65-70 проценты - ошо курстарға йөрөүселәр. Курстарҙың оҙайлығы - ике аҙнанан алып һигеҙ айға тиклем. Шулай уҡ унаң көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу, кисмә һәм дистанцион төрҙәре лә бар. Был курстарҙа шөғөлләнеү түләүле, айына ике мең ярым һум тирәһе тәшкил итә.

✓ 2010 йылдың 14 - 25 октябрендә үтәсәк Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек сиктәрендә Бөтә донъя башҡорттары (конгресы) Башҡарма комитеты тарафынан "Население. Население пункты. XVIII-XXI вв." тигән исем аҫтында Башҡортостан Республикаһының 42 районы ауылдары тарихын сағылдырған брошюралар баҫып сығарылды. Архив материалдары һәм ғилми сығанаҡтар нигеҙендә яҙылған ошо белешмәләрҙә һуңғы ике быуатта башҡорт ауылдарының барлыҡҡа килеүе, үҫеше, милли составы күрһәтелә. Брошюраларҙа шулай уҡ башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы, айырым төбәктәргә хас диалект һәм һөйләш үҙенсәлектәре тураһында мәғлүмәттәр бар. Баҫма ҡала һәм ауыл биләмәләре хакимиәттәре, уҡыу йорттары, мәктәптәр, китапханалар һәм район гәзиттәре өсөн тәғәйенләнгән.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# КРУГОМ -"СӘЛӘМ",

## йәки Ни өсөн "Яңы, тимәк, яҡшы" әйтеме ҡайһы осраҡта есеменә тап килмәй?

**Көн һайын тиерлек иртәнсәк етенән һигеҙгәсә көн тәртибендә - "Сәләм". Дөрөҫөрәге, яңы "Сәләм". Башҡортсаһы. Сөнки, урыҫсаһы хәҙер һуңыраҡ башлана. Бына шулай итеп һәр беребеҙ үҙ милли "фатирҙар"ыбыҙға ҡасып "бикләндек", тиергә лә була. Элекке, иҫке "Сәләм"де, урыҫтар ҙа, башҡорттар ҙа, белеүемсә, башҡа милләт вәкилдәре лә бергәләшеп ҡарай торғайны. Ә хәҙер башҡортса аңламағандар иртәнге сәғәт етенән телевизорҙарын башҡа каналдарға көйләй микән? Улай булғас, көн һайын "Сәләм"дә иртәнге яңылыҡтарҙан һуң 4-5 минут буйына рус телендә барған реклама кем өсөн күрһәтелә икән? Беҙ, башҡорттар, аңлайбыҙ ул, ә башҡа милләт вәкилдәре махсус рәүештә реклама ҡарар өсөн генә телевизорҙарын "БСТ" каналына күсереп тора микән? Реклама биреүселәр уларҙы телеаудиторияның яртыһынан мәхрүм итеүҙәрен беләме һуң? Хәйер, быныһы уларҙың эше.**

Дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, "Сәләм"де тик ултырып ҡына ҡарап булмай. Аңлап тораһығыҙҙыр. Урыҡ-һурыҡ, унан-бынан ғына ҡарарға тура килә. Әле бына еңелерәк була башланы. Йоҡо бүлмәһендә мин "Сәләм"де ҡарайым. Ә аш бүлмәһендә - тыңлайым. Айырмаһы юҡ, йәмәғәт. Шул уҡ музыка, шул уҡ тауыштар, шул уҡ "студия ҡунағы", шул уҡ йырҙар, шул уҡ йондоҙнамә. 6 сентябрҙән шулай ул. Хәҙер "Сәләм", дөрөҫөрәге, яңы "Сәләм" - интерактив тапшырыу. Ул телевизорҙа, тағы ла радиола. Һәм хатта Интернетталыр әле, моғайын. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, кругом "Сәләм". Ҡыуанысмы был? Һәйбәтме? Әлбиттә! Һуңғы ун йыл эсендә өйрәнеп, яратып, бер ваҡыт баш тартып, айырылышып, ҡабаттан өйрәнеп һәм ҡабаттан яратып өлгөргән "Сәләм"дең шулай күп һәм һүрәт күрһәтә һәм тауыш сығара алған һәр бер аппаратта булыуы, һис шикһеҙ, шәп. Кәләшем, һуңғы арала үтекте тоҡандырырға ла ҡурҡып торам әле, унан да "Сәләм" һөйләп алып китер һымаҡ тойола, тип мәрәкәләп тә алғайны...

Яңы "Сәләм"де, ғөмүмән, алып барыусылары биҙәй. Улар иҫ китмәле. Айырыуса, Наил менән Фәйгәл. Фамилияларын әйтеп тә тормайым. Бөтәһе лә беләләр. Уларға ҡараһаң да күңел күтәрелеп китә, уларҙы тыңлаһаң да. Ир-егеттәрҙең эшлекле костюмдарҙан һәм галстуктарҙан, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың байрам-тантана күлдәктәренән һәм самаһыҙ биҙәнеүҙән баш тартып, ябайыраҡ кейенә башлауы ла буштан түгел - республикабыҙҙа барған процестарҙың, асыҡлыҡҡа ынтылыуҙың, ыңғай үҙгәрештәрҙең бер һүрәтләнеше булып тора һымаҡ. Хәйер, Фәйгәлгә тоҡ кейҙерһәң дә, гүзәллеген юғалтмаҫ (быныһы һүҙ араһында ғына).

Шулай итеп, ун йыл буйына сығып килгән "Сәләм" быйыл яңырҙы ла ҡуйҙы. Ҡапыл ғына. Һәйбәтме был? Ә кем "насар" тип әйтергә баҙнат итә? Йә? Яңы һулыш, яңы ҡараш. Бөтә нәмә яңыса. Ҡара таңдан телевизорҙан бер сәғәт буйына тик башҡортса ғына (йәғни, элеккесә ҡатнаш форматта, берсә урыҫса, берсә башҡортса түгел) һөйләшеүҙәре, студияға килгән ҡунаҡ менән рәхәтләнеп башҡортса аралашыуҙары, матур-матур, дәртле-дәртле йырҙар менән (әпәт-тәки - башҡортса) ҡыуандырыуҙары, хатта ки тамашасылар (һәм дә радиотыңлаусылар) менән уйын уйнатып, бүләк таратыуҙары, шул арала матбуғатҡа күҙәтеү яһап өлгөрөүҙәре, бынан тыш ике тапҡыр яңылыҡтар менән таныштырыуҙары, тағы ла йондоҙнамә, ике тапҡыр һауа торошо хаҡында (йыбанмайынса, һәр бер район үҙәге хаҡында айырым) һөйләүҙәре, ҡунаҡҡа иң яҡшы һорау биреүсегә бүләк вәғәҙә итеүҙәре, һәм дә ошо көндә булған тарихи һәм иҫтәлекле даталар, юбилейҙар (айырыуса, үткән аҙнала "Халыҡ-ара филдәрҙе һаҡлау көнө" тураһындағы мәғлүмәт ныҡ тетрәндерҙе) һәм, ниһайәт, "Афиша" рубрикаһы "яңы "Сәләм"де иҫ киткес мәғлүмәтле һәм тамашасылар (һәм дә, әлбиттә, радио тыңлаусылар) өсөн ылыҡтырғыс итә. Шулай бит, йәмәғәт? Яңы "Сәләм"де тим, рәхәтләнеп ҡарайһығыҙҙыр һәм тыңлайһығыҙҙыр әле?

Ни булды? Оҡшамаймы ни һеҙгә яңы "Сәләм"? Ҡайһы ере менән? Нимәһе күңелегеҙҙе ҡыра? Алып барыусылары күркәм һәм мөләйем. "Студия ҡунағы"ның һәр береһе матур һәм аҡыллы. Әртист әртист инде. Һүҙҙәре төплө. Йырҙары дәртле. Мәғлүмәттәре төрлө яҡлы һәм ҡыҙыҡлы. Хатта студияға шылтыратып ҡунаҡ менән һөйләшеп алырға ла, форсаттан файҙаланып, туғандарға сәләм әйтергә лә мөмкинлек бар. Элекке "Сәләм" һәйбәтерәк ине тиһегеҙме? Ни өсөн? Ул ваҡытта иртәнге тапшырыу ике телдә - русса һәм башҡортса алып барылғаны өсөнмө? Башҡорт йырҙары рус көйҙәре менән аралаштырып бирелгәне өсөнмө? Студия ҡунаҡтарының күп булыуымы? Ауылдарҙан, райондарҙан даими рәүештә хәбәрҙәр ишетелеүеме? Әллә студияның иркен булыуы һәм сағыу төҫтәрҙә биҙәлеүеме?

Кеше, ғәҙәттә, бер өйрәнгәненә тартылып тик тора, тиҙәр. Консерватив ҡараш, тип атала икән ул. Яңы "Сәләм"гә күнегә алмауымды шуның менән аңлатырға маташтым. Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, тырышып-тырышып көн һайын тиерлек ҡараным. Һәм тыңланым. Хатта тапшырыуҙың сценарийын ятлап бөттөм һымаҡ. Әммә әлегә күңелем яңы "Сәләм"де ҡабул итә алмай. Нимәгә икән? Ниндәйҙер тар ғына студия. Унда телекамералар нисек кенә һыялыр инде? Биҙәлеше лә наҡыҫ ҡына. Әлеге лә баяғы алып барыусылар шәп инде. Улар программаны үҙ елкәләрендә тырышып-тырмашып һөйрәп алып барып аҙағынаса сығарып ҡуя.

Нисектер тоҡос ҡына булып ҡалды "Сәләм". Тар ғына бер сиктәргә ҡоршап ҡуйылғанмы ни? Уңға-һулға бер аҙым да атларға ярамай, тип кәртәләнгән кеүек күренә ул. Өс аҙна ғына ҡараным (унда ла көн һайын түгел), ә тапшырыуҙың ошо минутында ни булырын алдан белеп торам. Көн һайын иртән "Тапҡыр" уйыны. Уныһы халыҡ менән бәйләнеш бар, беҙҙә ҡарайҙар һәм тыңлайҙар, тиер өсөндөр инде, моғайын. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, элемтә беҙҙә әле тейешле кимәлдә түгел, телефон бәйләнеше өҙөлә лә ҡуя. Алып барыусылар ҡайҙалыр текәлеп, "Алло, алло, тыңлайбыҙ һеҙҙе" тип ултырырға мәжбүр. Ә ваҡыт үтә. Бына алып барыусыларҙың береһе студия ҡунағынан "Ә һеҙ ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуғанһығыҙ?" тип һорай һәм артабан, "Ә хәҙер йондоҙҙар беҙгә бөгөн ни вәғәҙә итә, шул хаҡта", тип дауам итеп алып китә. Бер аҙ ваҡыттан икенсе һорау: "Ә һеҙ ниндәй гәзитте уҡырға яратаһығыҙ?". Был инде мотлаҡ матбуғат күҙәтеүе алдынан яңғыраған һүҙҙәр. Алһыу Бәхтиеванан да шулайтып һоранылар, Рәмил Ғәйзуллиндан да, башҡаларҙан да...

Уйын-көлкөгә генә ҡоролған һымаҡ бөгөнгө "Сәләм". "Һәтитәүгә" генә, тимәк. Етди һөйләшеүҙәргә ваҡыт та юҡ кеүек. Тәү ҡарашҡа бөтә нәмә лә үҙ урынында һымаҡ. Әммә нимәлер юғалды "Сәләм"дән.

Иртәнге тапшырыуҙан нимә өмөт итәһең һин? Ул бит кешене уятып, позитив эмоциялар менән тулыландырып, яҡшы кәйеф булдырып, эшкә һәм уҡыуға оҙатырға бурыслы, тиеүселәр табылыр. Тапшырыуҙы эшләүселәр алдында башҡа маҡсат та ҡуйылмайҙыр, моғайын. Шулай ҙа ул. Барыбер, Башҡортостанда, Башҡорт илендә йәшәгәс, хатта ундай тапшырыуҙарҙың да милли йөҙә, ҡабатланмаҫ милли үҙенсәлеге булырға тейеш тә баһа. Улай ғына ла түгел, реклама клиптарының да үҙ милли йөҙә булырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Һәр тапшырыуҙа Башҡортостан, уның һәр төбәге булырға тейеш. Юғиһә, нимәгә кәрәк беҙгә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы? Кабелдә тоташтырһаң, йәки юлдаш "тәрилкә"һен ҡуйлаштырһаң, каналдар бихисап. Һинә нимә етмәй? "Сәләм" бөгөн - саф башҡортса барған тапшырыу ҙа баһа, тиерҙәр гәзит уҡыусылар. Баҡтиһәң, ул ғына етмәй икән.

Ғөмүмән, был мәҡәләне тәнҡит материал тип ҡарарға саҡырмайым. Уйланыуға, фекер алышыуға бер этәргес көс булһын әйҙә. Билдәле булыуынса, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы - дәүләт предприятиеһы, республиканыҡы. Йәғни, бөтөн республиканың һалым түләүселәре аҡсаһына эшләй. Шулай булғас, халыҡ, телевизор ҡараусылар һәм радиотыңлаусылар, эфирҙағы тапшырыуҙарға үҙ фекерен белдереп торорға һәм улай ғына түгел, үҙ тәҡдимдәрен индерергә, хатта, кәрәк булһа, ниндәйҙер йоғонто яһарға хаҡлы. Хатта бурыслы. Магазиндағы тауар сифатһыҙ булһа, тауыш күтәрәбеҙ ҙа баһа! Нишләп был осраҡта өндәшмәйбеҙ һуң?



**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Йыл башынан бирле спайс - тәмәке ҡатышмаһы һатыу менән шөғөлләнгән 72 һатыусы енәйәт яуаплылығына тарттырылған, ә уларҙан тартып алынған ҡатышма 1 центнерға тиклем барып еткән. Наркоконтроль хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, йәштәр араһында спайс тартыусылар арта бара. Уны тартҡандан һуң йәш кешеләрҙең дауаханаларға эләгеү, суицид осраҡтары йышайған.

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡорт балы", "Башҡорт аты", "Бөрйән бал ҡорто", "Башҡорт ҡымыҙы" кеүек традицион башҡорт брендтарын республикаға рәсми беркетергә һәм уларға тейешле сертификаттар булдырырға тигән тәҡдим индерҙе. Президент әйтеүенсә, Башҡортостанда традицион башҡорт брендтарын популярлаштырыуҙың яҡшы өлгөләре бар. Атап әйткәндә, төбәктә башҡорт ҡымыҙы нигеҙендә балалар өсөн аҙыҡ-түлек етештереү буйынса инвестиция проекты эшләнә.

✓Өфөлә "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк проблемалары" X төбәк конференцияһы булып үтте. Уны Рәсәй Фәндәр академияһының Тел ғилеме институты, Өфө ғилми үҙәге, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, БР Мәғариф министрлығы, БР Дәүләт телдәре буйынса совет, БР Йәмәғәт палатаһы, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы ойошторҙо. Конференцияла Башҡортостан диалектологтары ғына түгел, Мәскәү, Ижевск, Санкт-Петербург, Чебоксар ғалимдары ла ҡатнашты (тулыраҡ мәғлүмәт - киләһе һанда).

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәтендә ишек яндарын һәм эргәләге биләмәне пандустар менән йыһазландырыу буйынса төҙәлеш-монтаж эштәре тамамланды. БР Президенты БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фидус Ямалетдиновҡа республиканың барлыҡ ауыл-ҡалаларында, шул иҫәптән дәүләт власы органдары биналарында мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн уңайлы шарттар булдырыу буйынса эште тиҙләтергә ҡушты.

✓Билдәле булыуынса, Өфө предприятиеларындағы Ағиҙел бассейнына ебәрелеүсе ҡалдыҡ һыуҙарҙы өҫ фильтр блогы таҙарта. Эксперттар тикшереүе буйынса, ошо фильтрҙарҙан үткәрелгән ҡалдыҡ һыуҙар тәбиғи һыуҙан да сифатлыраҡ. Декабрь айында заманса технологиялар менән йыһазландырылған яңы 4-се фильтр блогы сафҡа индереләсәк.

## ЕТЕ РАЙОН

**Совет.** Район "Шәжәрә байрамы"н үткәреүгә әҙерлек дауам итә. Ул өфөләрҙен үҙ тамырҙарына, халҡына, тыуған крайына иғтибарын күтәреү, ғаилә бәйләнештәрен нығытыу маҡсатынан уҙғарыла. Сара сиктәрендә дуртенсе квартал аҙағына тиклем баш ҡаланың иҫтәлекле һәм тарихи урындарына экскурсиялар, рефераттар һәм иншалар конкурсы, лекциялар, семинарҙар, класс сәғәттәре үткәреләсәк.

**Дим.** Территорияны санитар таҙартыу һәм тәртипкә килтереү айлығы сиктәрендә өмә ойошторолдо. Унда 10 мендән ашыу кеше ҡатнашты. Һөҙөмтәлә 367 кубометр сүп-сар сығарылды.

**Калинин.** Моторҙар эшләү мәҙәниәт һарайында "Йәштәргә - эш!" XX республика акцияһы үтте. Уның маҡсаты - йәш белгестәргә, ссуздарҙың һәм вуздарҙың сығарылыш курсы студенттарына эш табыуҙа ярҙам итеү. Бында йәштәр эш табып ҡына ҡалманы, ә төрлө йүнәлештә ярҙам, юридик консультация алды.

**Октябрь.** Республика көнөн ҡаршылап, районда бихисап саралар уҙғарыу планлаштырыла. Мәғариф учреждениеларында төрлө викториналар, конкурстар, осрашыуҙар, "түңәрәк өҫтәл"дәр ойошторолһа, үсмерҙәр клубтары милли спорт төрҙәре буйынса программа тәҡдим итә. Шулай уҡ район предприятиелары һәм учреждениеларының ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар командалары фестивале, еңел атлетика кросы, спорт эстафетаһы ла тамашасылар күңеленә хуш киләсәк.

**Орджоникидзе.** Немец-рус йәштәре аралашыуының бер проекты буйынса 6-7-се синыфтарҙан тупланған төркөм йәйгеһен Галле ҡалаһында булды. Улар "Өфө йорто" халыҡ-ара проекты өҫтөндә эшләне. Проектҡа ярашлы, балалар үҙ ҡалаһына йәки төбәгенә хас булған өйҙө проектларға тейеш ине. Шулай итеп, Галле ҡалаһында урындағы театрҙар ярҙамы менән балаларҙың эскизы буйынса ысын тирмә ҡороласаҡ.

**Ленин.** Хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары урам комитеттары рәйестәре менән осрашты. Кәңәшмәлә территорияны санитар таҙартыу һәм тәртипкә килтереү айлығы, алда торған мөһим сара - Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәсьәләләре тикшерелде. Оло байрам - Республика көнө яҡынлашыу сәбәпле, был йүнәлештә эштәрҙе көсәйтергә тәҡдим ителде.

**Киров.** Ҡаланы үҫтерәүҙең йәмәғәт фонды "Өфө ҡалаһын һәм уның халҡын демографик үҫтереү" программаһы сиктәрендә "Параолимпия стадионы" проектын тормошҡа ашырып, райондың 20-се балалар-үсмерҙәр спорт мәктәбенә 31 мең 500 һумлыҡ профессиональ тренажер - йүгереү юлы бүләк итте. Был проект насар күреүселәргә һәм һуҡыр спортсыларға күнекмә, еңел атлетика буйынса Рәсәй йыйылма командаһы ағзаларына унышлы сығыш яһау, республика һәм ҡала халҡы араһында сәләмәт тормошто пропагандалау буйынса эш һөҙөмтәлелеген күтәреү өсөн заманса уңайлы шарттар тыуҙырыу йүнәлешендә тормошҡа ашырыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘСТӘРҘӘРЕ

# ТӘМӘКЕСЕ ҠАРТАЙМАЙ...

## сөнки ул йәшләй үлә

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында ултырғанда халыҡ араһында таралған ошо әйтем иҫкә төштө. Һүҙ ҙә юҡ, башҡа иғтибарҙы йәлеп итер темалар ҙа байтаҡ булды ултырышта, ә шулай ҙа депутаттар тикшереүенә сығарылған был тема - йәштәр араһында спайстар, йәғни тартыу ҡатнашмаһы ҡулланыу осраҡтары йышайыуы айырыуса хәүефләндерә.**

Баш ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алексей Ощепков баш ҡалала 2009-2011 йылдарҙа наркотиктар ҡулланыу һәм уның законһыҙ әйләнешенә ҡаршы тороу буйынса ҡабул ителгән комплекслы саралар программаһының үтәлеше тураһында һөйләне. Программа алты бүлектән тора һәм улар нигеҙҙә үтәлә. Быйыл июлдә Рәсәй Федерацияһында наркотиктарға ҡаршы сәйәсәт стратегияһы ҡабул ителгән. Баш ҡала программаһы тулыһынса уға тап килә. Ҡала округы Советының ошо йүнәлештә эшләүсе комиссияһы ултырышында тартыу ҡатнашмалары тураһындағы мәсьәлә лә ҡарала һәм Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға тартыу ҡатнашмаларын тыйылған препараттар исемлегенә индереү буйынса мөрәжәғәт ебәрелә. Унда фекер алышҡандан һуң документ РФ Дәүләт Думаһына тәҡдим ителә. Бөгөн РФ Хөкүмәтенең тартыу ҡатнашмаларын тыйылған препараттар исемлегенә индереү тураһындағы ҡарары бар. Әлеге ваҡытта шулай уҡ комиссия Дәүләт наркоконтроленә составында кофеин булған препарат - дезоморфинды ҡулланыуҙы тыйыу тураһында тәҡдим ебәргән. Әгәр наркотиктар ҡулланған кеше бер нисә йыл дауамында һаулығын юҡҡа сығарһа, дезоморфин бер нисә ай эсендә кеше организмын емерә. Әлегә был мәсьәлә ҡаралыу өҫтөндә.

Быйыл икенсе тапҡыр баш ҡала мәктәптәренең 9-11-се синыф уҡыусылары араһында наркотик матдәләр ҡулланыуға тест үткәрелгән. Унда үҙ теләге менән 93 процент самаһы үсмер ҡатнашҡан. Араларында ыңғай һөҙөмтәлеләр ҙә бар. Шуларҙың тиҫтәнән ашыуының анализы раҫланған һәм улар менән Республика наркодиспансерының махсус белгестәре даими эш алып бара. Бындай тест тикшереүен баш ҡала округы Советы ҡарамағындағы наркотиктарға ҡаршы комиссия йыл һайын ойоштороррға ниәтләй. Сөнки тест һөҙөмтәләре ысынбарлыҡты объектив күрһәтә, уңҡын алдында тороусы йәштәргә ярҙам ҡулы һуҙырға һуң түгеллекте асыҡлай. Әммә ҡалала махсус урта белем биреү һәм юғары уҡыу йорттары студенттарына тест үткәреү өсөн средстволар етешмәй.

Шулай уҡ программаға ярашлы, баш ҡалала Республика наркодиспансеры менән килешеү нигеҙендә хәүефле производстволарҙа эшләүселәргә тест үткәреү ҙә мөһим бурыс булып тора. Бөгөнгә шундай 18 предприятиела тикшереү уҙғарылған, өс кешелә наркотик бәйлелек асыҡланған.

Наркотиктар әйләнешен контролләү буйынса федераль хеҙмәттең БР идаралығы начальнигы Валерий Кокин белдереүенсә, наркотик ҡулланыусыларҙың, шул нигеҙҙә енәйәтсел төркөмдәрҙең йылдан-йыл артыуы күҙәтелә. Бында инде наркотик матдәләр таратыуҙа сиған диаспоралары ҙур роль уйнай. Улар хәҙер был эшкә бәлиғ булмаған балаларҙы йәлеп итә.

...Статистикаға күҙ һалһаң, бөгөн хаҡлы ялда булған бер кешегә пенсия түләү өсөн биш кеше эшләй. Бер нисә йылдан был һан 1:1 ҡаласаҡ. Киләсәк ҡара төҫтә килмәһен өсөн бөгөн йәмғиәтте һауыҡтырыуға ныҡлы иғтибар, тейешле саралар кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## ХОККЕЙ

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ҺӨЙӨНДӨРӘ ЛӘ, КӨЙӨНДӨРӘ ЛӘ...

КХЛ

**Ҡайһы команда еңеүсе булыр: яңы сезонды уңышлы башлаған "Себер" командаһымы, әллә Омск ҡалаһында "Авангард" менән уйнауҙа һөрөнгән "Салауат Юлаев"мы? Башҡортостан көйәрмәндәрен бына шундай тынғыһыҙ уйҙар борсоно. Юҡ, юлаевсыларҙың бер рәттән ике тапҡыр еңелеүен күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын.**

Майҙан хужалары уйын дилбегәһен беренсе минуттарҙа уҡ үҙ ҡулына алды һәм матч тамамланғансы, ҡулдан ысҡындырманы. Новосибирск ҡалаһынан килгән ҡунаҡтар ҡапҡаһын беренсе булып Владимир Антипов асты, йәнә ике минут үтеүгә Роберт Нильсон икенсе шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына сәпәне.

Икенсе осор шулай уҡ юлаевсыларҙың тулы өҫтөнлөгө менән үтте. Патрик Торосен һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһы тота, йәки кире ҡаға алманы.

Матчтың һуңғы осоро үтә көсөргәнешле булды. Ҡунаҡтар ҡоро иҫәптән ҡотолоу өсөн туҡтауһыҙ һөжүм итеүгә күсте һәм уңышҡа өлгәште. Иҫәп 4:1 булды.

Матч тамамланыр алдынан бер аҙ тыныслана төшкән юлаевсылар һөжүмдә тағы ла көсәйтә төштө. Уңыш көттөрмәне. Олег Сапрыкин һуҡҡан шайба ҡунаҡтар ҡапҡаһында ояланы.

Новосибирск һәм Новокузнецк ҡалалары командалары менән осрашыу йәнәш, бер-бер артлы килде. Ә уйындарҙа нindәй ҙур айырма. Юлаевсылар "Себер" менән сәкәләшеп, дәртләнеп уйнанылар, "Металлург" менән көс һынашыуҙы илке-һалҡы ғына башланылар, өҫтәүенә уйын ҡағиҙәләрен йыш боҙоп, штраф эскәмйәһендә ултырҙылар. Был шулай уҡ илке-һалҡы уйнау һөҙөмтәһе. Юлаевсылар бик йылғыр, сос уйнаған ҡунаҡтарҙы аяҡ салып йәки сәкән менән тотоп туҡтатырға мәжбүр булдылар. Гагарин кубогына дәғүә итеүҙе үҙенә бурыс итеп ҡуйған команданы былай кәмселектәр һис биҙәмәй. Һөҙөмтәлә - 3:2 менән еңелеү.

Континенталь хокей лигаһы чемпионатының яңы сезонын "Салауат Юлаев" командаһы уңышлы башланы, тип әйтеп булмай. Юлевсылар 6 матчтың бары тик икеһендә генә хаҡлы, тулы еңеүгә өлгәшә алды. Ә йәнә ике осрашыуҙа өҫтәлмә ваҡытта һәм буллит һуғыуҙа ғына оттолар. Дөрөҫөн әйткәндә, был бары тик ярты лаш еңеү. Ә Омск ҡалаһынан "Авангард" һәм Новосибирск ҡалаһынан "Металлург" менән осрашыуҙа буллит һуғыу буйынса еңелделәр. Әлбиттә, еңелеү ҡыуаныслы булмай, буллит һуғыуҙа отолоу үтә үкенесле.

Юлаевсыларҙың яҡшы уйнарға мөмкинлеге бар. Бары тик һәр матчҡа бик яуаплы ҡарарға, ныҡ әҙерлек менән килергә кәрәк.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөлә "2010 йылдың иң яҡшы врачы" тигән ҡала конкурсының еңеүселәрен билдәләнеләр. Был исемгә был юлы 20 врач лайыҡ булды, уларҙың береһе - 47-се поликлиниканың участка терапевы Елена Ғәлимова баш ҡала округы хакимиәте башлығы ҡулынан ике бүлмәле фатир асҡысы алды.

✓ Өфө ҡала округы Советында урын булмау сәбәпле балалар баҡсаһына йөрөй алмаған бер йәш ярымдан алып өс йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләргә компенсация түләү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Компенсация ай һайын бер балаға өс мең һум күләмендә түләнәсәк. Бөгөн Өфөлә биш йәшкә тиклемге 16 мең бала балалар баҡсаларына сиратта тора. Компенсация социаль яҡлау органдарында иҫәптә торған күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә биреләсәк. Был түләүҙәрҙе алыу өсөн йәштәрән районығыҙҙың мәғариф бүлегенә ғариза һәм ҡайһы бер документтар тапшырырға кәрәк буласаҡ.

✓ Үткән аҙнала Өфөлә ауыл хужалығы йәрминкәләре булып үтте. Өфөләләр унда картуфты килоһын 20-22 һумға, кишерҙе -20-25, кәбеҫтәне -18-20, сөгөлдөрҙө - 20-22, помидорҙы 20-23 һумға һатып алды. Йәрминкәләр дауам итә.

✓ Өфө белемәһендә йәштәр сәйәсәте учреждениелары белгестәренең эш хаҡына ҡушып, бер мең һум күләмендә өҫтәмә түләй башлаясаҡтар. Ҡала округы Советы рәйесе Ирек Нигмәтуллин хәбәр итеүенсә, яңы ҡарар 2011 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә. Депутаттар, был сара үсмерҙәр клубтарына йәш хеҙмәткәрҙәрҙе йәлеп итәсәк, тигән фекерҙә.

✓ "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында "Гигиена фәне һәм хеҙмәт медицинаһының хәҙерге заман проблемалары" Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы булып үтте. Форумда ауырыуҙарҙы һәм производствола имгәнеүселәрҙе медик-социаль реабилитациялауҙы камиллаштырыу мәсьәләләре тикшерелде.

✓ Рәсәй Федерацияһының Төбәктәр үҫеше министрлығында торлаҡ-коммуналь хужалығы өлкәһенең иң яҡшы предприятие, ойошмалары араһындағы Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы булып үтте. Бүләкләнеүселәр араһында "Уфагорсвет", "Сурсис", "Спецавтохозяйство", "Горзеленхоз" муниципаль унитар предприятиелары бар.

✓ Документтар Өфө ҡалаһының Карл Маркс урамында 37-се йорттоң 2-се корпусында урынлашҡан Башҡортостандың Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам итеү фондында ҡабул ителә.



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# ҮҘЕҢ БЕЛГӘН МӘҒЛҮМӘТТЕ...

## иҫәпсегә лә еткер




**Октябрҙә үтәсәк Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу бланкылары ниндәй буласаҡ?**

Иҫәпселәр өс төрлө бланк тултырасаҡ. Беренсеһе - Л формаһындағы иҫәп бите. Ул ил территорияһында даими йәшәгән барлыҡ кешеләргә лә, шулай уҡ оҙайлы ваҡытҡа сит илгә хеҙмәт командировкаһына сыҡҡан Рәсәй граждандарына тултырыла.

Был төп иҫәп бите һәм ул 25 һорауҙы үҙ эсенә ала. Улар бүлектәр буйынса бүленгән: енесе, тыуған көнө һәм йәше, тыуған урыны, никахы, гражданлығы, милләте, белеме һәм белем алыуы, телдәр белеүе, йәшәү сығанағы, мәшғүллеге йәки эшһеҙ булыуы, миграция. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан өҫтәмә рәүештә балаларының һаны һәм тәүге балаһы ҡасан тыуыуын һораясаҡтар. Әммә бөтә был һорауҙарға күскәнсе, иҫәп алыусы тәүҙә йортта һеҙҙең менән кемдәр йәшәүен асыҡлаясаҡ. Был кемделер төшөрөп ҡалдырмау йәки бер кешене ике тапҡыр яҙмаҫ өсөн кәрәк.

Иҫәп алғанда "йорт хужалығы" төп төшөнсә булып тора. Ул бер йортта йәки фатирҙа йәшәүселәрҙе, тулыһынса йәки өлөшләтә килемдәрен берләштереп, берлектә йәшәү средстволары менән тәьмин итеүселәрҙе аңлата. Йорт хужалығына туғандар ғына түгел, бағыусы ла, әхирәтегеҙҙең уҡыу ваҡытында һеҙҙә йәшәп торған улы ла булыуы мөмкин.

Йорт хужалығы бер генә кешенән дә торорға мөмкин. Әгәр һеҙ яңғыҙ йәшәйһегеҙ икән, йорт хужалығының берҙән-бер ағзаһы булаһығыҙ.

Әгәр шәхси йорт хужалығығыҙҙа бер нисә кеше йәшәй икән, иң беренсе һорау - "йорт хужалығында беренсе булып яҙылған кешенең кеме булаһығыҙ?" Варианттар ябай һәм аңлайышлы: ир, ул, атай һ.б. "Туған түгел" тигән яуап та ҡаралған.

Шулай уҡ Л битендә йәшәү средстволары сығанағын да күрһәтеү кәрәк.

П формаһындағы иҫәп бите торлаҡ бинаһына тултырыла. Ул торлаҡ, халыҡтың ниндәй санитар-гигиена шарттарында йәшәүе, элемтә һәм коммуникациялар бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлаусы һорауҙарҙан тора һәм һәр фатирға, йортҡа тултырыла. Бер үк ваҡытта ҡасан һалынғанлығы, ниндәй материалдан булыуы ла яҙыла. Торлаҡ бинаһының именлеге һәм санитар-гигиена шарттары дәрәжәһе лә асыҡланасаҡ. Бында инде һорау электрҙың, газдың, йылытыу тибы, һыу менән тәьмин ителеү (йылы, һыуыҡ), канализация, бәҙрәф, ванна һәм аш-һыу бүлмәһенең булыу-булмауына ҡағыласаҡ. Биттең икенсе бүлеге фатирҙың йәки йорттоң дөйөм майҙаны, йәшәү бүлмәләре, телекоммуникациялар (стационар телефон бәйләнеше, телевизион антенна, радио) тураһында мәғлүмәтте асыҡлай.

Һуңғы бүлек йорттағы йәки фатирҙағы һәр йорт хужаһына тултырыла. Йорт хужалығы берәү булыуы ла ихтимал. Бында кешеләр һаны, билдәгән бүлмәләр, Интернет селтәренә сығыу мөмкинлеге тураһында яуап бирәһегеҙ.

В формаһындағы бит даими рәүештә сит илдә йәшәгән, әммә иҫәп алыу ваҡытында ваҡытлыса Рәсәй территорияһында булған кешеләргә тултырыла. Уларға енесе, тыуған көнө, даими йәшәгән иле, Рәсәйгә килеү маҡсаты, Рәсәйҙә йәшәү оҙайлығы, тыуған иле һәм гражданлығы тураһында һ.б. һорауҙар бирелә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҮҘ ЭШЕҢДЕ АСАМ, ТИҺӘҢ...

**Үҙ эшен яңы башлаусы эшҡыуарҙар дәүләттән 300 мең һум күләмендә аҡсалата ярҙам алырға мөмкин. 13 сентябрҙән Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты старт-ап программаһына ярашлы үҙ эшен асыусыларҙың аҡсалата ярҙам тураһындағы ғаризаларын ҡарай башланы.**

Ошо йылдың 1 апреленән 1 июненә тиклем ҡабул ителгән һәр бер ғариза айырым ҡараласаҡ. Улар ҡаралып бөткәс кенә яңы ғаризалар ҡабул ителә башлаясаҡ. Быйыл эшҡыуарҙарға старт-ап программаһы буйынса бөтәһе 201 миллион һум күләмендә аҡса бүлеү ҡаралған. Бөгөнгө көндә үҙ эше булған эшҡыуарҙар страховка игәнәһе, төрлө күргәҙмә һәм йәрминкәләрҙә, электр селтәрҙәренә тоташтырыу һәм электр энергияһын һаҡлау программаһында ҡатнашҡан сығымдарының бер өлөшөн кире ҡайтарыу өсөн ғариза яҙа ала. Документтар Өфө ҡалаһының Карл Маркс урамында 37-се йорттоң 2-се корпусында урынлашҡан Башҡортостандың Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам итеү фондында ҡабул ителә.

Старт-ап программаһы буйынса аҡса бүленәсәк тармаҡтар: ауыл хужалығы, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ һәм балыҡ үрсетеү, урман хужалығы; эшкәртеүсе сәнәғәттең ҡайһы бер төрҙәре; төҙөлөш; автомобиль йүнәтеү оҫтаханаһы; тирене күмәртәләп һатыу; сувенир, халыҡ кәсебе әйберҙәрен, ғибәҙәт һәм дингә ҡағылышлы әйберҙәрҙе ваҡлап һатыу; көнкүреш һәм шәхси тотоноу әйберҙәрен йүнәтеү һәм ҡуртымға биреү; архитектура өлкәһендәге эшмәкәрлек; инженер-техник проектлау; геологик эҙләнеү һәм геофизик эштәр; геодезик һәм картографик эшмәкәрлек; стандартлаштырыу һәм метрология өлкәһендәге эшмәкәрлек; гидрометеорологик һәм уның менән йәнәш өлкәләрҙәге эшмәкәрлек; белем биреү; клиринг компаниялар (йыйыштырыу буйынса хеҙмәттәр); һаулыҡ һаҡлау һәм социаль хеҙмәттәр күрһәтеү; өй хужалығын алып барыуҙа ярҙам хеҙмәттәре; ҡунаҡхана һәм ресторандар; туристик агентлыҡтар; фотосалондар; йыуыу, химик таҙартыу һәм туҡыма һәм күн әйберҙәрҙе буяу; парикмахер һәм матурлыҡ салондары; ерләү һәм шуның менән бәйле хеҙмәттәрҙе күрһәтеү ойошмалары; физкультура-спорт һәм һауыҡтырыу буйынса эшмәкәрлек.

ҺОРАУ - ЯУАП

## ӘХЛӘҠИ ЗЫЯН КҮРҘЕМ

**Әҙләүҙә булған кешене енәйәтсе тип атаған өсөн туғандары уның намыҫын һәм кешелек дәрәжәһен яҡлап, 200 мең һум түләтеү талап итеп, мине судҡа бирҙе. Судья был талапты өлөшләтә ҡәнәғәтләндерҙе. Юғалған егетте тотҡайнылар, ул тағы ла миңә 30 мең юллау һалып, судҡа бирҙе. Мин түләнем. Енәйәт эше буйынса әхләҡи зыян күреүем сәбәпле, миңә нисек аҡса юлларға?**

- Законһыҙлыҡ ҡылыусы кеше тарафынан һеҙгә килтерелгән әхләҡи зыянды ҡаплатыу хаҡында юллау ғаризаһы менән, уға суд ҡарары көсермәһенән дә ҡушып, йәшәгән урынығыҙ буйынса судҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Суд ҡарары кемде яуапҡа тарттырыуҙы асыҡлау һәм ул кешене хөкөм итеү өсөн кәрәк буласаҡ.

## КОНДИЦИОНЕР ҠАМАСАУЛАЙ

**4-се ҡатта йәшәйбеҙ. Күршеләр кондиционер ҡуйғайны, уның шаулауы йоҡларға ҡамасаулай. Ошо мәсьәлә буйынса судҡа мөрәжәғәт итә алабыҙмы?**

Закон тарафынан билдәләнгән кимәлдән артып китмәйме икәнлеген белер өсөн кондиционерҙың ғәҙәти шаулауын һәм күршегеҙҙекен сағыштырып ҡарарға кәрәк. Тауыш фонын тикшереүсе комиссия төҙөүҙәрен талап итеп, йәшәгән урынығыҙ буйынса йорттар идаралығына мөрәжәғәт итегеҙ. Тикшереү ваҡытында һеҙ үҙегеҙ ҙә ҡатнаша алаһығыҙ. Торлаҡ файҙаланыу участкаһы (ЖЭУ) ҡала торлаҡ инспекцияһынан белгес саҡыртырға тейеш. Әгәр улар тауыш фонының норманан артыҡ булыуын асыҡлаһа, күршегеҙҙең кондиционерын һүтеп алыуын талап итәсәктәр.

## СЕРҘЕ ҺАТҺАЛАР...

**Баланы уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыу серен һатҡан кеше закон тарафынан язаға тарттырыла аламы?**

РФ Енәйәт кодексының 155-се статьяһына ярашлы, уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) бала алған кешенең ихтыярынан тыш был сер ошо фактты хеҙмәт йәки һөнәр бурысы ителеп һаҡларға тейеш кеше тарафынан йәки икенсе берәү тарафынан яуыз һәм әшәке ниәттәрҙә боҙола ҡалһа, ундай кешене 80 мең һум күләмендә йәки яуапҡа тарттырылыусының 6 айлыҡ эш хаҡы йәки башҡа төр табыш күләмендә штраф түләтеү, йәки 120-180 сәғәт ваҡытҡа мәжбүри эштәр башҡарыуға; йәки бер йылға холоҡ төҙәтеү эштәренә йәлеп ителеү, йә булмаһа өс йылға тиклем билдәле вазифаларҙа эшләү йәки эшмәкәрлек итеүҙе тыйыу шарты менән 4 айға ҡулға алыу ҡаралған.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Түлһеҙлек

Ҡайһы осраҡта ошондай төнәтмә ярҙам итә. Берәр ҡалаҡ бөтнөк, аҡ сәскә, аир тамырын алып, 0,5 литр ҡайнар һыу менән бешекләргә лә, ике көн буйы эсергә. Ике аҙна дауамында дауаланырға. Төнәтмәне һыуыҡтыста һаҡларға, ләкин йылытып эсергә. 4 аҙна ял иткәс, процедураны тағы ҡабатларға. Йылына 4 курс етә, 1 курс 1 аҙна дауам итә.

### Панкреатит

Ашҡаҙан аҫты биҙе ауырыуынан (панкреатит) 1-әр ҡалаҡ алтын тамыр, цикорий, арника, ваҡланған чага бәшмәген ярты литр һыу менән бешекләп, 1 сәғәт тоткас, көнөнә өс тапҡыр яртышар стаканлап эсергә.

### Эс ҡатыу

Эс ҡатыу тәбиғи булып китһә, бөтә организм ағыулана, уны булдырмау өсөн түбәндәге кәңәш ярҙам итер. Көн дә иртән 1 иҙелгән алма ашарға һәм көнө буйы 1 литр ҡара емеш (чернослив) һәм күрәгә компоты эсергә. Компотты ҡайнатҡанда емештәрҙе 200 грамдан да аҙыраҡ алмағыҙ, ул бик шәрбәт тә булмаһын. Компотты 20-30 минут тирәһе ҡайнатырға кәрәк. Ошо рәүешле дауаланғанда төнгөләккә 4-5 слива һәм ҡырғыстан ҡырылған 1 алма ашарға. 10 көн буйына дауаны өҙмәгеҙ, һөҙөмтәһе яҡшы булыр.

### Организмды нығытыу

Көн һайын 1 алма, 1 грейпфрут ашап торһаң, тән күҙәнәктәре эшмәкәрлеге оҙая, С витамины менән тулыланa, нервылар тынысланa. Көн һайын ҡурай еләге ашау ҙа яҡшы, ул саҡта ҡандағы шәкәр нормаға килер.

### Йүткеректән

Һалҡын тейеп, йүткерек башланһа, дарыуға тотоноуҙан алда һәр өйҙә булған ябай ғына ысулдарҙы ҡулланып ҡарағыҙ:

1) икмәк йомшағын зәйтүн майына манып алығыҙ ҙа йәйләп ҡына сәйнәгеҙ. Бер-нисә тапҡыр шулай ҡабатлағыҙ;

2) өлгөргән ике бананды иләк аша үткәреп йә сәнске менән иҙгеләп, бер стакан ҡайнар һыуға һалығыҙ, 1 сәй ҡалағы бал өҫтәгеҙ. Бер аҙ төнәткәс, сәғәт һайын 1-әр аш ҡалағы эсегеҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Белем ҡағиҙәһе

- Шәкерттәрегеҙҙең һәр хәрәкәтенә ҡарап торогоҙ, уларҙы матур һөйләшеүгә, гүзәл ғәҙәттәргә төшөндөрөгөҙ. Һүҙҙәрен һәм фи-келдәрен төҙәтегеҙ. Өҫ-баштарын, кейем-һа-лымдарын пак һәм таҙа тотоуҙарына иғтибар итегеҙ. Ҡыҫҡаһы, эске һәм тышҡы торошо менән һәр кемгә өлгө булырлыҡ дәрәжәгә ирешкәнсе шәкерттәрегеҙҙе тәрбиәләүҙе туҡтатмағыҙ.
- Шәкерттәрегеҙ менән уйнамағыҙ, көлмәгеҙ. Уларға йомшаҡ һәм миһырбанлы булығыҙ. Һәр нәмәне дөрөҫ һөйләгеҙ. Һәммәһен бер тигеҙ күрегеҙ, һәммәһен файҙа алырлыҡ рәүештә өйрәтегеҙ. Файҙалы һәм кәрәкле ҡағиҙәләрҙең бөтәһе менән таныштырығыҙ.
- Ишеткән нәмәләрегеҙҙең матурҙарын яҙығыҙ, яҙған һәм күнелегеҙҙә булған матурҙарын һөйләгеҙ. Яҙасаҡ әйберҙәрегеҙҙе иң тәүҙә дошман күҙе менән тикшерегеҙ. Дөрөҫ һүҙҙе һөйләгәндә Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис кемдең шелтәләүенән ҡурҡмағыҙ.
- Яҙған ваҡытта ҡәләмегеҙгә хужа булығыҙ. Халыҡтың мәртәбәһен һәм ғөмүми ғәҙәттәрен хөрмәт итегеҙ. Яҙған әйберҙәрегеҙ донъяла аҡыл эйәләре алдында һәм ахирәттә ҡаршығыҙға килгәндә йөҙ ҡыҙартырлыҡ булмаһын.
- Ожмах эсенә инеп, элгесен эләктереп ҡуймаҫтан элек, телегеҙ һәм ҡәләмегеҙ менән һис кемде рәнйетмәгеҙ һәм һүкмәгеҙ, ислам фирҡәләренең һис береһенә "мәҙһәпһеҙ", "аҙашҡан фирҡә" кеүек әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе япһармағыҙ. Меңләгән, миллионлаған кешенең йәнен ғазапламағыҙ. Уларҙың дошмандары тарафынан бергә ун һәм йөҙ ҡушып япһарған һүҙҙәргә ышанмағыҙ. Башҡаларҙан бигерәк үҙ иғтиҡатығыҙҙы тикшерегеҙ, үҙ иғтиҡатығыҙҙы дөрөҫләгеҙ. Кешеләрҙе тикшереп, үҙегеҙҙе мәхрүм итмәгеҙ. Әхирәттә ҡотолорға теләһәгеҙ, шиға һәм ваһабиларҙы һүгеп ғүмер уҙҙырыу урынына, үҙ хәлегеҙҙе ҡайғыртып, Рәсүл Әкрәм салуллаһ ғәләйһиссәләм вә Әсхәбе Кәрәм юлына эйәрегеҙ һәм юлынан айырылмағыҙ. Быһың менән бергә киләсәк көндәрҙән имен һәм хәбәрһеҙ тормағыҙ.
- Яҙған ваҡытта булдыра алырлығығыҙҙан юғары сығыу һәм булған дәрәжәгеҙҙән тағы ла бөйөк мәртәбәле күренеү өсөн көсәнмәгеҙ. Быһың арҡаһында яҙылған әҫәрҙәрҙең әһәмиәте һәм яҙыусының дәрәжәһе түбән төшә.

### Ватан һәм милләт

- Күге аҫтында йәшәгән, һауаларын еҫкәгән, һыуын эскән, икмәген ашаған ватаныңыҙҙы ныҡ һөйөгөҙ, уның исемен бөйөк итеү өсөн тырышығыҙ.
- Ватан - кешеләрҙең хөрмәте һәм һәр кем алдында ғорурланырлыҡ хазина. Шуға күрә ватан өсөн малығыҙҙы ҡыҙғанмағыҙ һәм көстәрегеҙҙе аямағыҙ. Ватан хаҡында быңдай физаҡәрлек күрһәтмәгән кеше унда йәшәргә лайыҡ түгел.
- Ата-әсәгеҙҙе, яҡын ҡәрҙәштәрегеҙҙе нисек һөйһәгеҙ, милләтегеҙҙе лә шулай һөйөгөҙ. Милләтегеҙ өсөн хеҙмәт итеүҙе йәнегеҙ өсөн бәхет тип белегеҙ. "Милләт" һәм "Ватан" һүҙҙәрен мәсхәрәләүселәрҙе тыңламағыҙ. Улар шәрәф сифатынан мәхрүм ҡалған бисаралар. Уларҙың үҙҙәрен ҡыҙғанығыҙ һәм быңдай түбән дәрәжәгә төшкәндәре өсөн мәрхәмәт күрһәтегеҙ.

**(Дауамы бар).**

ЙҮНСЕЛ ЙҮНЕН БЕЛЕР

# УҢЫШТЫ ЯНЫНДА ТОТАМ, ТИҺӘҢ...

## кеше кәйефенә бармаҡ аша ҡарама



### Бала саҡ хыялы

Баймаҡ районы Аҡморон ауылында тыуып үҫкән Байрамғолова Әнисә Мөхәмәтғәли ҡыҙын бөгөн районда "ШиК" тип аталған тегеү ательеһы хужаһы итеп кенә түгел, ә ысын мәғәнәһендә матурлыҡ тыуҙырыусы итеп беләләр.

Сибай педагогия училищеһының "Технология" бүлеген, шулай уҡ төрлө курстар тамамлағандан һуң, үҙенең бала саҡтан тегеүсе булырға тигән хыялын тормошҡа ашырыуға тотона Әнисә. Тәүҙә ул яҡындары, туғандары өсөн генә тегә, уларҙағы үҙенсәлекле кейем өлгөләрен күреп, таныштары ла Әнисәләр өйө яғына юллана. Ваҡыт үтеү менән кейемгә заказ бирергә килеүселәрҙең өйгә һыймай башлауы уны ҡырҡа ҡарарға килергә мәжбүр итә: ире менән һөйләшеп-кәңәшләшеп, кейем тегеү ательеһы асырға батырсылыҡ итә Әнисә. Шунан алып уның ательеһы тупһаһынан кеше өҙөлмәй. Уның хатта ҡала үҙәгенән ситтә булыуы ла үҙен яратҡан, сифатлы ла, заманса ла кейем тектереп кейергә теләгән кешеләрҙе ҡурҡытмай. Шуға ла клиенттар әҙлегенә зарланмай бөгөн Әнисә. Бер тапҡыр күңеленә яҡкан кейем тектереп кейгән кеше, һис шикһеҙ, бында тағы ла бер тапҡыр киләсәк. Үҙе генә түгел, ә туғандарын, дуҫтарын да килтерәсәк. Шулай итеп, күренмәгән сылбыр аша яңынан-яңы клиенттар күбәйә бара.

Төрлө байрамдар, туйҙар алдынан кеше айырыуса күп ательела. Заказдарҙы ваҡытында тамамлар өсөн ярҙамсыһы Аллабирҙина Гөлйемеш Әсҡәт ҡыҙы менән көндәр-төндәр буйы ательенан сыкмай эшләгән саҡтары була Әнисәнең. Кешенең ышанысын юғалтыу бер минут, ә кире ҡайтарыу айҙар-йылдарға һуҙылыуы мөмкин. Быңдай аҙымдарҙан үҙен ҡурсаларға тырыша һөнәр оҫтаһы. Яңы уҡыу йылы алдынан йыл буйы кейерлек уңайлы ла, матур ҙа, ата-әсәһенең кеҫәһенә лә һуҡмаған, ә иң мөһиме, баланың үҙенә оҡшаған мәктәп формаларын тегеү оҡшай уға. Шулай уҡ туй тантанаһында, кәләштең бәхетле минуттарында үҙенең дә ҡатнашлығы булыуы күңеленә йылылыҡ өҫтәй, ысын күңелдән әйтелгән рәхмәттәр тағы ла дәртләнеп ижад итергә көс бирә. Кешегә тән йылыһы ғына түгел, йән йылыһы ла кәрәклеген иҫәнән сығармай Әнисә. Килгән һәр бер кешегә айырым ҡараш, йылы һүҙ, иғтибар бүлә - ошолар булһа, кешеләр бында ылығып торасаҡ икәнлеген яҡшы белә ул.

Һәр кеше үҙе бер айырым донъя. Һәм барыһына ла бер күҙлектән ҡарап булмай. Кешеләр менән аралаша белеү арҡаһында, ғөмүмән, күпте хәл итергә мөмкин. Шуға ла тегеүсегә ниндәйҙер кимәлдә психолог булыу ҡамасауламай. Һәр клиенттың күңел торошон ул ишекте асып инеү менән аңларға һәм ҡабул итергә бурыслы, сөнки был эшенең алға барыу-бармауына тура юл. Донъяла кемдер һатыусы, йәки һатып алыусы ғына түгел бит, ә тәү сиратта, кеше. Шуға ла кешенең кәйефенә бармаҡ аша ҡарамау йәш эшҡыуарға уңышты янында тоторға ярҙам итә, әлбиттә.

### Мосолман кейеме - ул күңел торошо

Урамдарҙа мосолман диненең бар ҡанундарына тап килгән кейем кейгәндәр күбәйә бара, улар күңелде сафландыра, һоҡландыра, тирә-яҡҡа йәм өҫтәй.

- Мосолман кейемен тота килеп кенә тегеп булмай, - ти Әнисә. Уның бар нескәлеген белеп эш итергә кәрәк. Ошондай һорау менән мөрәжәғәт иткән тәүге ҡулланыусыма мосолман кейеме тегеп биреү өсөн байтаҡ ваҡыт талап ителде. Ғаиләбеҙ менән электән диндән алыҫ булмаһаҡ та, дингә ҡағылышлы күп китаптар уҡырға, дин әһелдәре менән аралашырға тура килде.

Әлегә ательела ҡатын-ҡыҙҙар өсөн мосолман кейемен күберәк тегәләр, ләкин ир-аттың да юлдары йышайған һуңғы арала. Быңдай кейемдәрҙе бары тик урамда ғына кейеп йөрөүселәр килмәй Әнисәгә, төрлө дини байрамдар өсөн, шулай уҡ күпләп көнкүрешкә инә барған мосолман ҡанундары буйынса үткәрелгән туй тантанаһына ла кейем тектереүселәр бихисап. Мосолман кейеме кейеп йөрөрлөк рухи күтәренкелеккә еткәндәргә һоҡлана Әнисә, сөнки быңдай кейем бөгөн оҡшай, иртәгә оҡшамай, тип сисеп ырғытырлыҡ алъяпҡыс түгел. Күңелең менән ошондай кейем кейерлек булғас ҡына быңдай аҙымды эшләргә кәрәклеген яҡшы аңлағандар килә ательеға. Уйҙары ғына түгел, йөрәге лә таҙа, саф булырға, тик яҡшы, яҡты, ыңғай энергия ғына бөркөргә тейеш ундай кеше тирәяғына. Мосолман кейеме - ул тәндә ҡаплау ғына түгел, ул - күңел торошо, йөрәк тибеше.

### Эшҡыуарлыҡ

Эшҡыуарлыҡтың "эшҡыуар" тигән исеменән башҡа ыңғай яғы самалы икәнен был тармаҡта эшләүселәр яҡшы белә. Ниндәйҙер уңышҡа, әҙ булһа ла килем алыуға өлгәшеү өсөн ашауҙан, төн йоҡоларынан яҙыу ҙа үҙ эшен башлаусыға таныш. Эшҡыуарлыҡ эшен башлағанда уның әҙмекүпме табыш килтерә башлауын өс йыл көтөргә кәрәк, тигәндәренә көләмһерәп ҡарағандар быһың шулай икәнлегенә тиҙ инана. Ләкин нисек кенә булмаһын, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәскә, төрлө һалым-йыйымдарҙы, бихисап отчеттарҙы йырып сығырға көс табып, алға атлау мөһимлеген, нәҡ шул кәртәләрҙең сынаҡтырыуын, үҙ эшенә тағы ла яуаплыраҡ ҡарарға булышлыҡ итеүен аңлап эш итә Әнисә. Артҡа сигенергә, барыһына ла ҡул һелтәргә теләгән саҡтарҙы бары тик бер минутлыҡ көсһеҙлек итеп ҡарағанда ғына эштәренең туҡтап ҡалмаясағын белә ул. Яҡындарының, ә иң мөһиме, үҙ-үҙе алдында бөгөлөп төшмәү, ҡара болоттар артында яҡты көн булырына көслө ышаныс, бер уңышһыҙлыҡҡа биш уныш менән яуап ҡайтара алыу - барыһы ла рухи ныҡлыҡ талап итеүен аңлап йәшәгәндә һәм эш иткәндә генә эштәренең алға барасағын күптән аңлаған йәш эшҡыуар.

Әлбиттә, эшҡыуарлыҡҡа тотоноу ҡарары еңел бирелмәй, бер ҡалыпҡа һалынған, өйрәнелгән тормошондо ҡырҡа үҙгәртеп ебәрергә ҡарар иткәндә янында һине аңлаған, башланғыстарыңды хуплап-йөпләп торған, һиңә ышаныс белдергән кешеләрҙең булыуы мөһим. Әнисәнең был йәһәттән тераге ныҡ. Баскетбол буйынса тренер булып эшләүсе Азат ҡатынына һәр саҡ ярҙам итергә әҙер. Ательеға ҡағылған барлыҡ эштәрҙе бергәләп башҡаралар, килеп сыҡҡан төрлө хәлдәрҙе тикшереп, береһендә шәп идея барлыҡҡа килһә, икәүләп ултырып, ентекләп уйлап эш итәләр. Туҡымалар магазинына, ательеға кәрәкле төрлө әйберҙәр алырға ла икәүләп йөрөйҙәр. Әйткәндәй, яҡын-тирәлә туҡымалар магазины булмауының эште ныҡ тотҡарлауына әсенә Әнисә. Сибайҙағы бер-ике магазиндан башҡа, йөҙәп йөрөп һайларлыҡ, күңелгә хуш килерлек туҡымалар табыу бик ауырға төшә. Шуға күрә Әнисә Баймаҡта туҡымалар магазины асыу хыялы менән яна. Ләкин бында теләк кенә аҙ шул. Матди яҡтан тулыландырылмаған барлыҡ изге хыялдарҙың да селпәрәмә килеүе көн кеүек асыҡ. Ошондай магазин асыу, сигеү машинаһы һатып алып, теккән кейемдәрен тағы ла матурыраҡ, нәзәкәтлерәк итеү хаҡында һөйләгәндә күҙҙәре янып киткән Әнисәгә ҡарайһың да, уның донъяуи хыялдары тормошҡа ашырыла ышанаһың. Мәскәү ҙә ҡапыл төҙөлмәгән. Яйлап, ләкин тырышып, үҙ маҡсатыңа ынтылаһың икән, буй етмәҫлек булып күренгән эштәрҙе лә атҡарып сығыуға шик юҡ.

**Шулай итеп...**

**Үҙ хеҙмәте ярҙамында кешегә шатлыҡ өләшеп йәшәй алыуы менән бәхетле Әнисә. Афарин, тиергә ҡала быңдай тормош дилбегәһен ҡулына ҡайырып тоторға тырышҡан, һәр бер ауырлыҡтан бөгөлөп төшмәгән, йөрәгендә ҡуҙ, күҙендә оҫҡон сәсрәп торған башҡорт ҡыҙына.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Шәрип ауылынан 15 саҡырымдарҙа Йөрүҙәнгә ҡойоусы Беййылға буйында Ахун исемле башҡорт ауылы бар, бында башҡа башҡорттар менән бергә башҡорт ахуны ла йәшәй. Беҙ ошо ауылда тәү тапҡыр мосолмандарҙың тәбиғи башҡорттарҙан булған дин башлығын күрҙек, сөнки ундайҙар бик һирәк: уларҙа ҡабул ителгәнсә, ахун китаптарҙы белеүе, ғилемлелеге яғынан иң беренсе кеше булырға тейеш, ә башҡорттар китапҡа ҡарағанда ҡымыҙҙы нығыраҡ ярата.

Ахундың ауылын Өфө, Әй һәм Йөрүҙән йылғалары араһында ятҡан иркен ерҙәрҙең сиге, тиеберәк ҡарап була: ошо урындан тигеҙлек аҡрынлап тауҙарға әйләнә, һәм Илек йылғаһы буйындағы Илек исемле сыуаш ауылы янында, Йөрүҙән йылғаһы аръяғында тауҙар ныҡ ҡына бейегәйә бара. Был ауылда ҙур ғына тире эшкәртеү заводы төҙөлгән, унда төрлө күн етештерелә һәм аяҡ кейемдәре тегелә...

... Катав Ивановский заводына Урал арты һырттарының иң бейектәре күршеләш, уларҙың иң яҡындағыһына тиклем 30 саҡырымлап ара бар. Шул һыртҡа Әүҙән йылғаһы буйлап үргә табан барғанда, заводтан дүрт саҡырым алыҫлыҡта, йылға ағымы буйынса уң яҡ ярҙа тау итәгенән сығып ағыусы тоҙло һыулы шишмәләр күрҙек, уларҙан баткыл һаҙлыҡ хасил булған. Был башҡорттарҙың мал көтөүҙәре өсөн бик ымһындырғыс урын. Аттар, үгеҙ-һыйырҙар 30 саҡырымдан да арыраҡ ерҙәрҙән ошо һыуҙы эсергә килә, һәм бындағы малдар ошо арҡала бик ныҡ һимерә: беҙ был заводтан 15 саҡырым алыҫлыҡтағы Муллаҡай тигән башҡорт йәйләүендә бик ҡәнәғәтләнеп ҡунәтә алдыҡ.

Муллаҡай йәйләүе Ирәмәл тауы тураһында һөйләгәндәребеҙҙе раҫлап, ошо тирәләге ерҙәрҙең ниндәй булыуын белдереп тора. Ошо һырттар янында йәйләүсе башҡорттар башҡалары менән сағыштырғанда етешерәк йәшәһә лә, уларҙың тирмәләре тышҡы яғынан уҡ башҡорттарҙың фәҡирлеген күрһәтеп тора. Бында һәр ҡайҙа ла туҙ ҡыуыштар ҡуйылған ине, улар һауа торошо үҙгәреп киткәндә башҡорттарҙың һаҡланыу урыны булып тора. Тау итәгенең һәр ваҡыт томанлы булыуы һәм йыш яуған ямғырҙар уларҙың ҡәҙимге кейеҙ тирмәләрен яраҡһыҙ иткәнлектән, улар бер ерҙән икенсе ергә күсеп йөрөргә мәжбүр була...

... Егелге (авторса - Джигальга. - Ред. иҫк.) билдәле Урал арты һырттарының береһе булып, көнсығыш менән төшлөк араһында ята. Уның оҙонлого һыбай барғанда бер көнлөк юл, тиҙәр. Ул әйтеп үтелгән Әүәләк һыртынан бейегерәк. Унда өс урында емерелеп төшкән ҙур таш өйөмдәре күренә, улар бейеклеге 50 сажинға еткән ҙур ғына ҡалҡыулыҡтарҙы хасил итә. Әүәләк һыртының буйынан-буйына ағас аҙ үҫә; түбәнен һаҙлыҡтар биләй. Бында тау түбәләрендә иң баткыл һаҙлыҡтарға хас булған мүк еләге, ҡыҙыл һәм күк көртмәле кеүек еләкемештәр бик күп. Уның остарынан ике йылға ағып сыға: көнсығыш осонан Ҡатай йылғаһына ҡушылыусы Тоҡтан, төшлөктән Йөрүҙәнгә ҡойоусы Ҡалғаҙы йылғасығы башлана...

... Ул саҡта үҙҙәренең ҡышлауҙарына ҡайтыусы башҡорттар, башланған сабынлыҡтарын теләртеләмәҫ кенә ҡалдырып, һәр ҡайҙа ла беҙҙе оҙаҡ ҡына туҡталдырып тора ине. Был ерҙә башҡорттар нисек аҙ булһа, шул саҡлы Себер губернаһынан килеүселәр күп ине. Тауҙарҙа һәм йылға буйҙарында үҙенәнүҙе үҫеүсе ҡомалаҡтың бик күп булыуы Себер кешеләрен Уралға тартып тора, сөнки Себерҙең Уралға яҡын өләшендә лә, далалы Исәт провинцияһында ла был үсемлек юҡ. Урал тирәһендә йәшәүсе кешеләр артелдәргә йыйылып, бер хәүефһеҙ ҡомалаҡ йыйып булһын өсөн башҡорттарҙан билдәле бер тау-урманлы ерҙе һатып ала. Башҡа промыслаларҙағы кеүек, улар үҙҙәре араһынан береһен становщик итеп һайлап ҡуя, ул һатып алынған ерҙең уртаһында ҡыуыш ҡора, кәрәкле аш-һыу хәстәрләй; башҡалары урман буйлап йөрөп, ҡомалаҡ йыя. Ҡомалаҡ йыйырға уңайлы булһын өсөн пайва һәм пестерҙәр ҡулланыла: улар туҙҙан (пайва) йәиһә йүкәнән (пайва) үрелеп, бер-береһе менән шундай уҡ үрем менән тоташтырылған ике тыҙыҙан ғибәрәт; уның, аҫып йөрөтөлә торған сумкаларҙағы кеүек, эйәрҙең артҡы ҡашағаһына эләктереп ҡуйыу өсөн уртаһында тишеге була. Был атта һыбай ултырыусыға өҙөп алынған ҡомалаҡты һалыр өсөн иплә урын булып, уның менән бер урындан икенсеһенә йөрөп була.

Муйыл, йыраҡ ерҙәрҙән булмаһа ла, уның емешен йыйыуҙы ниәт итеп килеүселәр булған үҫемлектәр иҫәбенә инә. Ҙур булмаған Урал йылғалары буйында ул шул тиклем күп үҫә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уны йөкләп йыйырға була. Был йәлләүгә генә лайыҡ, сөнки емештәре өсөн уны тыуҙырыусы әсә бөтөнләйгә һәләк итәлә; емешен йыйыу өсөн ағасҡа меңеү крәҫтиәндәргә мәшәҡәтле эш булып тойола: артыҡ уйлап тормайынса, муйылды тамырынан киҫеп алалар. Ошо меҫкен хәлендә ағас емешенең ауыҙҙы бөрөштөрә алыуы менән бәхетле: улай булмағанда, бигерәк тә башҡорттар уны йыйыуға әүәҫлек күрһәтһә, ул Урал менән күптән хушлашҡан булыр ине...

...Күпшылыҡ хаҡында һүҙ сыҡҡас, ошо унай менән башҡорт ҡөйәҙҙәре тураһында ла әйтеп үтәм. Йөнлө ауыҙ менән йөрөргә күнекмәгән йәш башҡорт егеттәре, һаҡалһыҙҙар йәмғиәтенән алыҫ булғанлыҡтан, һаҡал ҡырыу өсөн көлкөлө ысул ҡуллана. Улар һаҡалдарын ҡыҙҙырылған көл менән ыуа һәм, епте ныҡ итеп ҡатлап, уның менән йөндәрен икешәрләп урап алып, айырыуса етеҙ һәм оҫталарса йолҡоп сығара. Улар әйткәнсә, көл тирене йомшарта һәм йөн йолҡонол сыҡҡанда була торған ауыртыуҙы баҫа; шулай итеп, кем еп менән ҡырыныу тигәнде ишеткәне бар икән, хәҙер уның ҡайҙан килеп сыҡҡанын беләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иван Иванович Лепехин (1740-1802) - Рәсәй Император фәндәр академияһы академигы һәм уның даими секретары, медицина докторы, Санкт-Петербург Иректе иҡтисад йәмғиәте ағзаһы, Дәүләт медицина коллегияһының, Тәбиғәтте тикшереүселәрҙең Берлин һәм Гессен-Гамбург патриотик йәмғиәттәренең почетлы ағзаһы. 1768-1772 йылдарҙа И.И. Лепехин Ырымбур губернаһын өйрәнеү буйынса ойошторолған өс Академик экспедицияның береһенә етәкселек итә. 1770 йылда И.И. Лепехин Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап килеп, Урал һырты аша уҙа, Яйыҡ, Мейәс, Әй һәм Ҡариҙел йылғаларының башына барып етә, ул ваҡыттағы Ырымбур губернаһының үҙәк районларында тикшеренеүҙәр алып бара. Уның экспедицияһы утыҙҙан артыҡ завод һәм рудниктарҙа була, байтаҡ ҡына башҡорт ауылдарында һәм йәйләүҙәрендә туҡтап, уларҙың көндәлек тормошона ҡараған мәғлүмәттәр йыя. Академик Лепехин яҙмалары башҡорт этнографияһы өсөн бөгөн дә ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Экспедиция материалдары "Доктор һәм фәндәр академияһы адъюнкты Иван Лепехиндың Рәсәй дәүләтенең төрлө провинциялары буйлап сәйәхәт көндәлеге яҙмалары" исеме аҫтында бер нисә томда донъя күрә. "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ошо яҙмаларҙың башҡорттарға ҡараған өлөштәренән өҙөктәр баҫылды. Бынан 240 йыл элек билдәле урыҫ зыялыларының береһе булған ғалим И.И. Лепехиндың башҡорт тормошо күренештәрен, ижтимағи мөнәсәбәттәрен, ғөрәф-ғәҙәттәрен ентекләп яҙып алып, ғилми баҫмала сығарыуы үҙе үк оло баһаға һәм ихтирамға лайыҡ. Ошо материалдарҙы гәзиткә әҙерләүсе Бәҙри ӘХМӘТОВ (Вәлиәхмәт Бәҙретдинов) академик Лепехин сәйәхәтнамәһенең тулыраҡ вариантын тәржемәләп, айырым баҫма сифатында сығарыу өсөн Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенә тәҡдим итәсәк.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Аҙағы.**

**Башы 21-се һанда).**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ИКЕ КӘМӘЛӘ...

## бер юлы йөҙөп булмай

**"Бер кеше бер юлы ике милләт вәкиле була аламы?"**

**Ринат КАМАЛ, яҙыусы:** Ҡайһы берәүҙәрҙең "Мин - ике халыҡ улы" тигәнен күп ишеткәнем бар. Әммә улар шулай тиһә лә, барыбер күңеле бер халыҡты яҡыныраҡ күрә. Был тәрбиәнән, һин ниндәй халыҡ мәҙәниәтендә, рухында тәрбиәләнәһең, шунан киләлер. Вадим Сафин был турала бик дөрөҫ әйтә: "Ике кәмәлә бер юлы йөҙөп булмай. Шулай уҡ, бер юлы ике милләт кешеһе булыу ҙа мөмкин түгел". Бер ыңғай ике кәмәгә баҫҡан кеше, һыу өҫтөндә дауыл сығыу менән, ҡолап төшәсәк.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, илебеҙҙә совет заманындағы сәйәсәт милли үҙанды юҡҡа сығарыуға йүнәлдерелгәйне бит. Бына беҙҙең көнбайыш Башҡортостандағы милләттәштәргә лә татар мәҙәниәте йоғонтоһо көслө булды. Татар телле дәреслектәрҙән татарса уҡытыу, милләтара никахтар, күп дәүерҙәр буйы татар менән башҡорттоң аралашып йәшәүе был йоғонтоно тағы ла көсәйтте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы берәүҙәр өсөн ике милләт араһындағы айырма ла юғала барҙы. Көнбайыш райондары башҡорттары үҙенсәлекле диалектта һөйләшә. Ә уларға күп йылдар "Һеҙ татарса һөйләшәһегеҙ, һеҙ татар", тигәнде һеңдерҙеләр. Иғтибар итегеҙ әле, рус телендә генә һөйләшкән сиған, йәһүд, украин халыҡтары халыҡ иҫәбен алыуҙа бер ҙә үҙ милләтен йәшереп тормай! Милләтте эргә-тирәләгеләр йоғонтоһона бирелеп түгел, тарихи тамырҙарыңды барлап, рухыңды ата-бабалар рухына көйләгәндән һуң, аңлы рәүештә билдәләргә кәрәк. Тамырҙарыңда ике милләт ҡаны ҡатышһа иһә, шулай уҡ ҡарарыңды үлсәп, тикшереп, бер милләтте һайлау кәрәк. Сөнки бер юлы ике милләт вәкиле булып булмай.

**Әҙһәм НИҒМӘТОВ, эшҡыуар:** Татар менән башҡорт ҡатнашмаһы булған кешеләрҙән: "Миндә ике ҡапма-ҡаршы холоҡ көрәшә", тигән аптыраулы һүҙҙәр ишетергә тура килгеләне. Һәр бер халыҡтың генетик холоҡ бар шул. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡайҙа тыуыуына ҡарамаҫтан, кешегә холоҡ тыумыштан уҡ һалына һәм ғүмер буйы һаҡлана. Ҡатнаш ғаилә ҡороусы кешеләр үҙҙәренең балаларын ҙур һынауға дусар итә. Ике төрлө ҡан һуғыша улар организмында.

Петр I заманында башҡорт-татар ҡатнаш никахы ҡәтғи тыйыла. Бының сәбәбе - ике халыҡ туғанлашып, бергә тупланыу ҡурҡынысы булғандыр. Аҡ батша, башҡорттар татарҙар менән туғанлашып, бергә ҡушылһа, ҙур көс барлыҡҡа килер, тип ҡурҡып торған. Шуға күрә, ике туғандаш халыҡтың күңелендә яһалма рәүештә бер-береһенә һалҡынлыҡ тыуҙырылған. Алда әйтеп киткәнсә, халыҡ хәтере - йылдар буйы йыйылған генетик хәтер. Элекке заманда тыуҙырылған ҡаршылыҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле лә ниндәйҙер кимәлдә һаҡланып ҡалған.

Һәр кеше индивидуаль булған кеүек, һәр милләт тә үҙенсә. Һәр кешелә "эго", йәғни үҙ-үҙенә булған ыңғай мөнәсәбәт һаҡлана, шулай уҡ һәр халыҡта ла был күренеш бар. Шуға күрә бер кешелә бер уҡ ваҡытта ике халыҡ үҙаны йәшәй алмай. Был - психология ҡануны. Әгәр ҙә кеше милләтен аныҡ ҡына һайлай алмай, икеләнә икән, дөрөҫ эшләмәй. Атайҙар эшләгән хатаны балана төҙәтергә ҡалдырырға ярамай. Сөнки милли рух - артабанғы йәшәйештең нигеҙе.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

*✓ Антропологик күҙлектән ҡарағанда, башҡорттар менән венгрҙар араһында понтик һәм Урал антропологик тибы таралған. Венгрҙар бөгөн, беҙ - һундар, беҙ Атилла тоҡомонан, тиҙәр һәм төрки телле халыҡтарға яҡынлашырға теләйҙәр.*

**Кешелек тарихында империялар тарҡалыуы һәр саҡта ла ҡәбиләләрҙең бөйөк күсенеүенә килтергән, Ер шарының теге йәки был ерендә яңы ҡәүемдең, дәүләттең йәиһә әр-яңы империяның барлыҡҡа килеүе менән тамамланған. Миҫалға Византия империяһын алайыҡ. Уның тарҡалыуы Осман империяһын барлыҡҡа килтерә, Алтын Урҙаның тарҡалыуы Рәсәй империяһына нигеҙ һала. Ә инде башында Атилла торған Һундар империяһының тарҡалыуы Европала Мадьярстан йәки Венгрия дәүләте формалашыуы менән тамамланған. Тарихтан билдәле булыуынса, һундарға тиклем башҡорттар менән венгрҙарҙың ата-олаталары бер империяла - Туран дәүләтендә йәшәгән, тигән фараз да бар. Яңыраҡ Венгрияла мадьяр халҡының 3-сө ҡоролтайы булып үтте. Унда беҙҙең республиканан да ғалимдар ҡатнашты. Шуларҙың икеһе - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы ХИСАМИТДИНОВА һәм ошо институтының этнология бүлеге мөдире Ринат Мөхәмәт улы ЙОСОПОВ ҡоролтай тәьҫораттары менән уртаҡлаша, Евразия феномены булған мадьяр-венгрҙар тарихы хаҡында һүҙ алып бара.**

# ВЕНГРҘАР ТАРИХИ

## донъяның глобаллəшеү ғəрəсəтендə

**Фәндә венгрҙар фин-уғыр йәки төрки сығышлы тигән ике төрлө ҡараш, ике фараз йәшәй. Венгрияла үткән ҡоролтайҙа ҡатнашып, венгр халҡы менән аралашҡандан һуң, күңелегеҙҙә ошо ике ҡараштың ҡайһыныһы нығынды? Уларҙа фин-уғырлыҡ көслөрәкме, әллә төркилекме?**

**Р. ЙОСОПОВ:** Венгрҙар һуңғы осорҙа үҙҙәрен һунғар, венгр тип атауға ҡарағанда, халыҡтың боронғо атамаһын - мадьярҙы алғараҡ сығарырға тырыша. Уларҙың археологтары, тарихсылары әйтеүенсә, мадьяр менән уғырҙарҙың ҡатнашып йәшәүе яҡынса б.э. т. 2-3 мең йыл элек, хатта V быуатҡа, скиф-сармат осорона тиклем була, һәм телдәрендә уғыр компонентының өҫтөнлөк алыуы ошоноң менән бәйле. Ошонан һуң венгрҙар көньяҡҡараҡ, ҡайһы бер ғалимдар әйтеүенсә, Төньяҡ Алтайға күсә һәм боронғо төрки халҡының ата-бабалары менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Күрәһең, ошонда уҡ улар Алтайҙа йәшәгән боронғо сарматтар менән дә аралашып йәшәйҙәрҙер. Халыҡтың күсмә йәшәү рәүешен ҡабул итеүе, тәү сиратта, йылҡы үрсетеү, атта һыбай йөрөү, һунарсылыҡ менән шөғөлләнә башлауы ла ошо дәүергә тура килә. Ошо ике компонент уларҙың тормошонда һәм мәҙәниәтендә бик ҙур роль уйнай, мәҫәлән, йырткыс йәнлектәр һүрәте төшөрөлгән һауыт-һаба, ҡоралдар йәки боронғо скиф-сармат донъяһы элементтары барлыҡҡа килә. Күп белгестәр әйтеүенсә, һундар көнбайышҡа киткәндән һуң мадьярҙар яйлап-яйлап Көньяҡ Себер, Төньяҡ Алтайҙан Көнбайыш Себер, йәки Көньяҡ Уралға, йәки Волга буйына күсеп ултыралар һәм бында йәшәгән башҡорттар, башҡа төрки халыҡтар менән бәйләнешкә керәләр. Күп археологтар фекеренсә, улар беҙҙең төбәккә IV быуатта уҡ килә башлай һәм VI быуатта, Төрөк Ҡағанаты был яҡҡа күскәс, мадьярҙар ошо төбәктә теркәлә. VI - VIII быуаттарға тиклем уларҙың бында йәшәүе археологик материалда сағылыш таба. Мәҫәлән, Оло Теген, Кушнарен, Стәрлетамаҡ һәм башҡа урта быуат ҡәберлектәрен сағыштырып ҡарағанда, бөтәһендә лә уғыр компоненты бар. Был осраҡта уғыр тип тел яғынан түгел, ә мәҙәниәт яғынан ҡарайбыҙ һәм боронғо мадьярҙарҙы күҙаллайбыҙ. Бына шул ваҡыттан алып бөгөнгө венгрҙарҙа малсылыҡ, ете ырыу төшөнсәләре, айырым төрки һүҙҙәре хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған. Ҡасандыр ике милләттең үҙ-ара аралашыуы хужалыҡ кимәлендә генә түгел, хатта үҙ-ара ҡыҙ биреп, ҡыҙ алыу кимәлендә үк булған, тип уйларға мөмкин. Антропологик күҙлектән ҡарағанда, башҡорттар менән венгрҙар араһында понтик һәм Урал антропологик тибы таралған. Венгрҙар бөгөн, беҙ - һундар, беҙ Атилла тоҡомонан, тиҙәр һәм төрки телле халыҡтарға яҡынлашырға теләйҙәр. VIII - IX быуат баштарында боронғо мадьярҙар "Тыуған илен" эҙләгән дәүерҙә Боронғо Хазар, Леведия ерҙәрен үтеп, 895 йылда Арпат етәкселеге аҫтында Көнсығыш Карпатҡа етә. Бында Дунай йылғаһы буйында 895 йылдан башлап венгрҙарҙың яңы төйәктә яңы тарихы башлана.

**Ф. ХИСАМИТДИНОВА:** Борон-борондан венгрҙар үҙҙәренең тыуған иле ҡайҙалыр Уралда, Волга буйында, тип һанаған һәм ошо ерҙәргә ынтылған. Бәлки, боронораҡ та килгеләгәндәрҙер, әммә тарихи документтар буйынса урта быуаттарҙа беҙҙең территорияларға килгәндәр. Ниңә килгәндәр? Әлбиттә, үҙҙәренең боронғо тамырҙарын эҙләп килгәндәр. Килеүселәрҙең бер нисәһенең яҙма ҡомартҡыһы ла һаҡланған, мәҫәлән, монах Юлианды ғына иҫкә төшөрәйек. Һәр хәлдә, венгрҙарҙа уларҙың ҡайҙандыр китеүҙәре, башҡорттар менән туғанлығы тураһындағы мәғлүмәттәр, бәлки, яҙмаларҙа, бәлки, халыҡ хәтерендә йәшәгән. Әйтәйек, Юлиандың яҙмалары буйынса, ул ҡайҙалыр Волга буйында кем менәндер аралашып һөйләшкән. Ниндәй телдә һөйләшкән ул? Мин венгрҙарға шуны әйттем: йә Юлиан ниндәйҙер төрки телендә, йә венгр телендә һөйләшкән - беҙ уны аңлағанбыҙ. Әле Венгрияла йөрөп ҡайттыҡ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡайһы бер һүҙҙәрҙән башҡа, телдә уртаҡлыҡ юҡ, сөнки бөгөн венгр теле фин-уғыр төркөмөнә ҡарай һәм унда төрки телдәренән үҙләштерелгән, ә, бәлки, һаҡланып ҡалған ниндәйҙер боронғо төрки һүҙҙәре бар. Д. Немет тигән ғалим венгр телендә меңгә яҡын төрки һүҙҙәрен тапҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре беҙҙең әйтелешкә яп-яҡын. Фонетикала өндөң үҫешендә икенсе бер өнгә күсеү законлығы бар. Ҡайһы бер һүҙҙәр ошо закон буйынса үҙгәрештәр кисергән, мәҫәлән, емеш - дөмөлш, юрматы - ярмат. Немет тапҡан миҫалдар 70-80-се йылдарҙа йәшәгән тюркологтар тарафынан тағы байытылған. Венгр тел белгестәре башҡорт һәм венгр телдәренең грамматикаһы ла, ялғауҙары ла, интонацияһы ла уртаҡ, тип билдәләй. Бының сәбәбе, бәлки, фин-уғыр менән төрки телдәренең агглютинатив тел төркөмөнә ҡарауындалыр. Шулай уҡ фин-уғыр телдәренән айырмалы рәүештә, венгрҙарҙың телендә номадизм көслө сағыла. Мәҫәлән, Ҡоролтай Бугац тигән урында булды. "Бугац" һүҙендә "буға", "үгеҙ" һүҙе ята, йәғни, "үгеҙ яланы" йәки "үгеҙ көткән ялан". Бугац Кечкемет тигән ҡала эргәһендә урынлашҡан. Кечке - "кәзә", мет - "һуҡмаҡ", йәғни "кәзә һуҡмағы". Был атамаларҙан венгрҙарҙың малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡ икәнлеге асыҡ күренеп тора. Венгр телендә ырыу исемдәре менән бәйле атамалар күп. Бындай традиция төрки телдәрендә лә көслө, әйтәйек, халыҡ "бында бөрйәндәр, бында ҡатайҙар йәшәй", тип әйтһә, йылға һәм башҡа топонимдарға был исем бәйләнә лә китә. Венгрҙарҙа ла бындай топонимдар күп, был шул уҡ төрки традицияһы тураһында һөйләй.

Венгрҙарҙың ғалимдары ғына түгел, ябай халҡы ла шулай фекерләй: халыҡты юҡҡа сығарырға теләһәң, уның аңынан кем икәнлеген юйырға кәрәк. Был - немецтар уйлап тапҡан теория, тиҙәр улар. Ул саҡтағы Австро-Венгрия составындағы баш бирмәҫ номад халыҡ менән идара итеү өсөн немецтарға теория кәрәк булған. Венгрҙарҙы фин-уғыр тамырлы, тип белдереү тап ошо теория ла инде. Бөгөн венгрҙар беҙҙә бер ниндәй ҙә фин-уғырлыҡ юҡ, ти. Беҙ ханты-мансиға ла, мари-мордваға ла, финдарға, эстондарға ла антропологик күҙлектән дә, дөйөм алғанда, бөтә мәҙәниәт күҙлегенән дә яҡын түгелбеҙ. Был бары идара өсөн уйлап табылған теория, тиҙәр. Венгрҙар яугир халыҡ һәм улар яугирлыҡты культ итеп күтәрә. Башҡорттар ҙа яугир халыҡ, әммә беҙ яугирлыҡты юғалтып бөткәнбеҙ. Ҡоролтайҙа уғыр халыҡтарынан бер вәкил дә булманы, ә 17 республиканан төрки халыҡтары вәкилдәре ҡатнашты, йәғни был уларҙың төрки тамырҙарын барлауына ишара ине.

**Һуңғы ун биш йыл эсендә бөтөн донъя башҡорттарының өс ҡоролтайы үтте һәм, асылда, хәл ителәсәк төп мәсьәләләр араһында башҡорт халҡын һаҡлап ҡалыу, үҫтереү һ.б. ошо йүнәлештәге проблемалар үҙәккә ҡуйылды. Башҡорттарҙан айырмалы рәүештә, венгрҙар үҙ дәүләтселегендә йәшәй, уларҙа милләтте һаҡлап ҡалыу ихтыяжы юҡ, сөнки был мәсьәләләр барыһы ла Европа кимәлендә күптән хәл ителгән. Венгрҙар ниндәй маҡсатта ҡоролтай үткәрә?**

**Р. ЙОСОПОВ:** Венгрҙар - Европала тарихи тамырҙары менән иң көслө халыҡтарҙың береһе. Венгрҙарҙың хәҙерге мәҙәниәте фин-уғырҙарҙыҡынан, йәғни ултыраҡ халыҡтарҙыҡынан шул тиклем айырыла, шуға ла улар элекке тарихтарын яңынан ҡайтарырға теләй. Тарихтарын, мәҙәниәттәрен балаларының күңеленә лә һеңдереп үҫтерәләр, ҡоролтайҙа шуға шаһит булдыҡ: унда ололар ғына түгел, бала-саға ла күп булды. Ата-әсәһе уларға уҡ-ян һатып ала, балалар ат сабыштарын, малсылыҡҡа, күсмә йәшәү рәүешенә, яугирлыҡҡа бәйле төрлө йолаларҙы күрә. Ысынлап та, унда сауҙа нөктәләрендә малсылыҡҡа бәйле әйберҙәр, ҡорал тулып ята. Ҡолонсаҡтарҙың муйынына тағыла торған ябай бәләкәй генә ҡыңғырауҙарҙан алып, ҙур ян, уҡтар, һөңгө, тимерҙән һәм тиренән тегелгән һуғыш кейемдәре, ат егеү өсөн бар кәрәк-яраҡтар, тиренән эшкәртелгән әйберҙәргә тиклем бар һәм был әйберҙәр ултыраҡ тормош алып барған, еләк-емеш йыйып йөрөгән халыҡтарҙан уларҙы айырып тора. Аш-һыуҙарында ла һөт аҙыҡтары өҫтөнлөк алып тора. Тимәк, бындай саралар үткәреп кенә түгел, ә ошондай йәшәү рәүеше алып барып та венгрҙар үҙҙәренең боронғо күсмә тормош алып барған халыҡ икәнлеген тойоп, беренсенән, тарихына, икенсенән, үҙҙәре кеүек көслө халыҡтарға таяныр, үҙҙәренең көсөн күрһәтә. Рухи яҡтан шул тиклем көслө булған халыҡтар донъяла күп түгелдер. Шуныһы ҡыҙыҡлы: унда бөгөн тегелгән милли костюмдарҙы, ҡоралдарҙы археологик ҡаҙылмаларҙа табылғандарынан айырып алып булмай. Бына ни тиклем иғтибарлы улар үҙ тарихына һәм мәҙәниәтенә! Ә беҙҙә милли костюмдар күбеһенсә сәхнә, театрлаштырылған тамашалар өсөн яһала һәм тегелә.

**Ф. ХИСАМИТДИНОВА:** Венгрҙарҙы, бер яҡтан, немецтар, икенсе яҡтан, славяндар уратып алған. Бына ошо ике көслө халыҡ эргәһендә милләт булараҡ юғалып ҡалмаҫ өсөн ҡоролтай үткәреү, үҙеңде башҡаларға танытыу - ул глобалләштереүгә ҡаршы күрелгән сара.

Халҡыбыҙ, тиҙәр, венгрҙар, донъяла үҙе менән үҙе сиктәш берҙән-бер халыҡ. Йәғни, Беренсе донъя һуғышынан һуң элекке Венгрия дәүләте кисҡеләнеп, бөгөнгө территорияһы кеүек дәүмәлгә ҡалған. Мәҫәлән, Румынияла венгрҙар менән сиктәш - трансельван венгрҙары, Украинала - Карпат арьяғы венгрҙары, йәғни уларҙы төрлө яҡлап венгрҙар уратып алған. Уларҙың был һүҙенән һуң, беҙҙең яҙмышыбыҙ был йәһәттән дә уртаҡ, Башҡортостанда йәшәүсе башҡорттар ҙа башҡорттар менән сиктәш йәшәй, тием. Уларҙың әйтеүенсә, ошондай ситуацияла венгрҙарҙың милләт булараҡ һаҡланып ҡалыуында уларҙың тарихи һәм мәҙәни үҙенсәлектәрен һаҡлап алыуы сәбәпсе. Мәҫәлән, Ҡоролтайҙа сауҙа итәләр ине. Беҙҙә лә ҡоролтай, һабантуйҙарҙа һаталар. Әммә беҙҙә Ҡытай, Вьетнам әйберҙәре һатһалар, Венгрияла ҡоролтайҙа бөтә һатҡан әйберҙәре венгр тарихы, мәҙәниәте менән бәйле. Ҡайҙа ҡарама, сыбыртҡы, Атилла, Арпад, башҡа батырҙар, яугирлеге сағылдырылған һүрәтле футболкалар, уҡтар, башҡа атрибутика һаталар. Был әйберҙәрҙе етештереүҙе улар сәнәғәт кимәлендә күтәргән, сөнки ҡул менән берәмләп етештереп кенә ул әйберҙәрҙе осһоҙға һатып булмай. Һыбай сабып китеп барғанда көрәшәләр, уҡтар аталар, һуғышалар - барыһы ла ысынлап башҡарыла! Был тамаша ҡоролтай үткән ерҙә төрлө урында бара. Башҡорттарҙа ла борон кәзәне бер-береһенең әйәренән тартып алыу уйыны булған, хатта шул уйынды ла күрһәттеләр. Бәләкәй генә балаларҙың шунда уҡ уҡтан атып ҡарап, сыбыртҡы шартлатып йөрөүе халыҡ мәҙәниәтен йәш быуынға тапшырыуҙың һәм рух тәрбиәләүҙең иң яҡшы ысулы. Беҙҙә булһа, кәртәләр ҡуйып, бала-сағаны тамаша барған урынға яҡын да ебәрмәҫтәр ине. Ҡоролтайға ике йөҙ тирмә ҡуйғандар, уларҙы ла, беҙҙәге кеүек, сепрәктән йәки башҡа материалдан эшләнмәгән, ысын кейеҙ

✓ *Ваҡланды, буғай, абзый. Оҙон ғүмерендә, бәлкем, ысынлап та ҙур эштәр эшләп йөрөгәндер ҙә ул, шуларҙы, һаҡһыҙ ҡыланып, иҙәнгә төшөрөп сатнатты. Заманың менән бергәрәк атла шул барыбер ҙә. Ябай әйткәндә - ҡартая ла бел.*



**Рәсүл Сәғитов, Башҡортостан радиоһында сәйәси журналистика менән яҡындан шөғөлләнеү менән бергә, һуңғы йылдарҙа сәсмә әҙәбиәттә яңылыҡ тип ҡабул ителерлек күренеш - хикмәтле хикәйәләрҙе лә ихлас яҙа, был өлкәләге ижади емештәре беҙҙең гәзиттә лә донъя күргәне бар һәм улар уҡыусыларыбыҙ күңеленә хуш килде. Әйткәндәй, автор тәьҫораттарҙы <u>*imen-aman@mail.ru*</u> адресына һалыуығыҙҙы үтенә. Бөгөн уның сираттағы әҫәрҙәрен баҫабыҙ.**

Рәсүл СӘҒИТОВ




## ЭШ ҺӘМ ТЕШ

Ерҙә ғәләмәт ҙур көнбағыш ҡабығы ята. Яртыһы. Һәйбәт хужа кәмәһен, кәрәкмәгән саҡта ярға һөйрәтеп сығарып, түңкәреп ҡуя бит, был да тап шулай ҡапланып ятҡан. Ҙур, тиеүебеҙ сағыштырмаса, әлбиттә, анауы ҡырмыҫҡа янында ул диңгеҙ карабындай мөһабәт күренә.

Ҡайҙандыр ярыҡ табып, эсенән бик ыҡсым кәүҙәле ҡырмыҫҡа килеп сыҡты шул. Аңлауыбыҙса, әле "карап"тың эсен тикшереп йөрөгән. Тикшереүҙән ҡәнәғәт ҡалған, тип һығымта яһау яғындабыҙ, сөнки, йөҙөн сирып, ҡулын һелтәп, ҡайҙалыр олаҡманы, ә баһа ҡылыуын дауам итте: етеҙ генә ҡыланып, әйләнеп ҡарап сыҡты, моронон түңкәрелгән "кәмәнең" эс яғына йәнә төртөп алды. Ҡиәфәте хайран эшлекле бының. Үҫеп ултырған ағасты йығырға теләгән урмансы ишеләй тағы ике мәртәбә ураны.

...Икәү булып киттеләр әле былар. Иптәше, ҡара-ҡара, бынан да йылғырыраҡ. Эсенә инеп торманы, әйләнде-әйләнде лә, "ҡуй, юҡ менән булышмайыҡ" тиептер инде, ҡайҙалыр ғәйеп тә булды.

Ә тәүгеһе ҡәтғи ҡарарға килде шикелле. Шулай шул: ана, кәмәне auҙарып һалды ла, һөйрәкләп алып та китте. Ҡайҙа тарталыр инде - эргә-тирәлә иләү-фәлән тойолмай. Бәлкем, күмәкләп яңы нигеҙ ҡорорға йыйыналарҙыр. Фараз хаҡтыр: шуға ла ҙурыраҡ сеймалға тотонғандыр.

Бик ныҡыш ҡырмыҫҡа икән үҙе - ваҡ ҡырсын өҫтөнән тая-тая һөйрәтеүен белә. Ара-тирә иҫеп ҡуйған ел кибеп еңеләйгән "кәмә"не әйләндереп тә һалғылай. Әммә хәрәкәтте был туҡтата алмай.

Оһо! Кәмәгә табан икенсе бер бөжәк йүгерә бит. Таныш тойола әле үҙе. Сырамытам: был бит баяғы... Йылғыр. Иптәшенә булышмайынса юҡҡа сыҡҡас, уның тураһында яманыраҡ уй уйлап ҡуйғайным, яңылышҡанмындыр, ахырыһы: һәләк ярҙамсыл икән дә үҙе - ана, сабып йөрөп, ундан да этәрә, аҫтан да күтәрә!.. Ыҡсым Кәүҙә генә рәхмәтһеҙ бер нәмәкәй икән: ярҙам итә башлағанды күреп, исмаһам, туҡтап баш та ҡаҡманы, һаман үҙ юлын ҡыуа... Беҙҙең Йылғыр бына, исмаһам, эшсән: йүгереп йөрөп этәрә. Шул арала, эргә-тирәнән тегеләй-былай йыбырлаған башҡа ырыуҙаштарын туҡтатып, хәл-әхүәл белешергә лә өлгөрә. Бигерәк алсаҡ инде үҙе, ни мөғжизә менәндер һәр береһенең уңыштарын да, туңыштарын да белә ул: әйтер һүҙен дә, тултырып ҡарар күҙен дә таба. Танышмы-түгелме, һәр береһенә йылмайып баш ҡағып булһа ла уҙа. Күрешә һала ла, тағы кәмә яғына йомола. Ыҡсым Кәүҙә ише һөмһөр йөҙлө түгел инде - уныһы, ана, башын күтәреп ҡарауҙы ла белмәй. Йылғыр күрешкән-хәл белешкән, үҙенең ҡайһы бер шәплектәрен һөйләгән арала байтаҡ китергә өлгөрһә ни - "хәҙер ҡыуып та етербеҙ уны. Уҙып та китербеҙ. Әйткәндәй, уҙыу - бик шәп фекер түгелме?.. Шулай итәйем әле..." Ошо уйын тормошҡа ашырам тип Йылғыр йәнә юғалды. Ыҡсым Кәүҙә генә кәмәне ҡоронан һөйрәтеүен дауам итә.

Ҡайҙа ҡорола икән быларҙың нигеҙҙәре? Ҡараш, ошо һорауға яуап эҙләп, йән-яҡты ҡапшай. Күренмәй. Ә ҡырмыҫҡалар байтаҡ икән. Оҙаҡламай араларында йәнә таныш арҡа пәйҙа булды: шул - Йылғырҙыр. Ниндәйҙер бик бәләкәй сүпте апара бирҙе лә, ташлап, алға йүгерҙе, йәнә кемдәрҙелер осратты. Ғәжәп: осрашыуҙар ваҡытында арҡаһында гел йөк буласы... Нигеҙ ҡоролған ергә лә буш ҡул менән бармаҫтыр: яҡын-тирәләге кипкән үлән киҫәген табып, бик арыған ҡиәфәттә алып барып auҙарыр. Һаулығына зарланыр, ауырыһа ла эшләп йөрөгәнен ҡабатлап-ҡабатлап һөйләр, рәттән өс йыл ялда булмауына ишаралар: ил эшенән һис бушай алмай. Ишетеүселәр ошо ваҡытта уның былай ҙа көр тауышының йәнә лә көслөрәк яңғырағанына диҡҡәт ҡылыр. Һүҙ араһында ҡыршылдатып алмаһын тешләр - башҡалар һымаҡ йәйләп ашап ултырырға ваҡыты юҡ бит уның. Бүтән бәғзеләр, ана, эштән иртәрәк ҡайтып та баралар бит, юғиһә.

- Эш бөттөләме ни? Һин ҡалай бәхетле!.. - ти ул уларға. Әйтмәй ни: беренсенән, эргәләренән өндәшмәй үтеп китмәй, икенсенән, бөтә эш уның өҫтөндә лә баһа!

Ыҡсым Кәүҙә күҙҙән юғалған. Бәлки, нигеҙ урынына яҡынлашалыр. Йылғыр, моғайын, уны киң йылмайып ҡаршы барып алыр. Алмай ни - сыуаҡ йөҙлө бит ул, шуға күрә үҙен йәмғиәттә бик яраталар. Йүгереп барыр ҙа, Ыҡсым Кәүҙә менән йәнәш баҫып, хатта алғараҡ сыға биреберәк, кәмәне тартышыр. Йөҙөнә арығанлыҡ ғазабы сығарыр. Арыһа ла эшлекле ҡиәфәттә, көр тауыш менән, иләүҙәге Төп Башлыҡ ишетерлек итеп, ҡысҡырып, көнбағыш ҡабығын урынлаштырыу менән етәкселек итер. Хәбәрендә, ана, Төп Башлыҡтай һөйләп ебәреүҙәр бар:

- Эш күп, ҙур, мөһим ваҡиғалар алдында торабыҙ, бергәләп, йылдам ғына бөтөп ҡуйырға тейешбеҙ. Әллә ҡайҙан ярҙам көтөп ултыра алмайбыҙ. Әйҙәгеҙ әле, әйҙә-ә-ә!..Ыҡсым Кәүҙә шым ғына ситкәрәк барып баҫыр. Ә Йылғыр икенсе бер ҡырмыҫҡаға ҡаршы сабыр.

## ТӨҘӘТЕҮ

- Фәлән ағай, шунан, хәлдәрең нисек? - тип өндәште урам сатында һөйләшеп торған ике ирҙең береһенә улар менән әле генә килеп күрешкән өсөнсөһө.

- Аллаға шөкөр. Үҙең һуң, арыумы?

- Сыҙаһаң, түҙерлек.

Бер килкенән күрешеүсе китергә йыйынды:

- Ярай, ағайҙар, ҡабаланам, һау булығыҙ, - тине лә, йылдам баҫып, йәйәүлеләр ағымына ҡушылды.

- Хуш.

- Һинән йәшерәкме ни? - тип һораны ҡалғандарҙың береһе.

- Олораҡ. Беренсе курсҡа килгәнемдә биштә ине, минең кеүек үк әрменән һуң ингән, - тип яуапланы икенсеһе.

- Ә ниңә һуң "ағай"ҙан һалдырҙы?

- Хөрмәт итәлер...

Һәйбәт яуап. Бая уның: "Былай һиңә ҡусты тейеш кешемен", - тип төҙәтмәүе лә арыу булды. Тормош төҙәтә ул.

## ТӨП СӘБӘП

- Ялҡытты инде ул частниктар! Эй, сабышалар шунда тегеләй-былай. Тызанлашып!

- Автомобилдә йөрөү тыйылмаған бит.

- Барыбер йәнде көйҙөрәләр... Шуға ҡыш көнө мин уларҙан үҙемсә үс алам.

- Ниңә һәм нисек?

- Йәнгә тейәләр тием дәһә! Йөрөргә хут бирмәйҙәр.

- Шулай инде... Ә һинең үҙ юлың бар ҙабаһа - йөк машиналары өсөн.

- Гел генә улай булмай шул, осрашырға тура килә.

- Үс алыуың нисек тормошҡа аша инде?

- Светофор алдында туҡтап торғандан һуң, ҡуҙғалып киткәндә, үкертеп газға баҫам. Арттағылар, аҡ төтөнгә күмелеп, оҙаҡ ҡыбырҙай алмай ултыра.

- Ә үҙеңде шулай итһәләр?

- Мин бит - бейектә!

- Ә... тәпәштә булһаң?..

- Ниндәй мәғәнәлә?

- Үҙең бәләкәй машинала ултырһаң?

- Минеке... юҡ та.

Бәлкем, төп сәбәп - ошолор?

## БАР

- Был өлкәне Фәлән Фәлән улынан да яҡшы белгән кеше юҡ!..

Ҡысҡырыбыраҡ әйткәндәй тойолдосо... Маҡтап тағы нимәләрҙелер теҙҙе-теҙҙе лә был, тағы тәкрарланы:

- Фәлән Фәләнов ҡына - иң һәйбәт белгес!

Бынығы ла ғәҙәти тауышы түгел... Һөйләшеү ҡысҡырыусы хеҙмәт иткән ойошманың ҡабул итеү бүлмәһендә булды. Хужаһының ишеге ҡыҫыҡ ҡалғайны.

Ярамһаҡланыуҙар һаман да бар шул әле, бар...

## ОЛОҒАЯ БЕЛ...

Дауахана. Һикһәндән өҫтәрҙәге ҡарт. "Өҫтәрҙәге" икәнлеге тәғәйен билдәле булғанға ғына белдерелде, ә былай үҙе бик йәш күренә. Йә тыумыштан шулай йәш сырайлылыр, ҡаны, нәҫеле шулайҙыр, йә... Ғәфү итегеҙ, кем әйтмешләй, ғүмерҙәре буйы үҙҙәрен ҡарап ҡына йәшәгән, рәттән ике мәртәбә сөскөрөү менән үк дауаханаға йүгергән, йыл да шифаханаларға йөрөгән, еңелерәк эш эҙләгән, тапҡандар ҙа юҡ түгел бит.

Ашханала урындар етешмәй. Бабай бер көн һуңлабыраҡ барған икән, урынын биләгәндәр. Таяғын шартлатып мөйөшкә атып бәрҙе лә:

- Тор!.. - тип аҡырҙы был биләүсегә. Уныһы аптырауҙан, ҡапыллыҡтан телен тешләй яҙҙы.

Ә абзый, ҡара-ҡара, таяҡһыҙ ҙа һәп-һәйбәт баҫып торасы!.. Күҙҙәренән уттар сәселә!

Биләүсе әрепләшеп торманы, әле генә бушаған өҫтәлгә, уны һөртөп өлгөрмәһәләр ҙә, өнһөҙ генә күсте лә ултырҙы. Ашап бөтөп бара ине инде ул, сәйен ҙур-ҙур итеп тиҙ генә уртланы ла, сығып та китте.

Ә бабай һаман һөйләнеүен белде:

- Вәт һин уларҙы, кеше урынына ҡул һонорға ғына торалар... Минең кеүек эшләп ҡара әле һин башта!..

Шуға оҡшаш мәғәнәлә оҙаҡ һуҡранды.

Ашнаҡсы ҡатын түҙмәне, аш таратыу ярығына эйелә биреп:

- Ниңә шулай тауыш ҡуптараһың, абзый!? Буш урындар бар ҙа инде... Етмәһә, ул егет һеҙҙән алдараҡ килгәйне дауаханаға. Киреһенсә, һеҙ уның урынын баҫып алдығыҙ. Шуға гел генә аҙағыраҡ йөрөй ул. Бөгөн үҙең һуңға ҡалдың, - тине.

Ишетмәне ҡарт. Теләмәне. Һөйләнеүен белде. Үҙе яҡлау эҙләп, ян-яғына ҡаранды. Ғәжәп, ғәҙәттә йәштәрҙе белекһеҙлектә ғәйепләргә яратыусы, ҡаты тәртипле совет заманын һағыныусы өлкәндәрҙең дә һис кеме, ризалашып, баш ҡаҡманы, күҙҙәрен дә, һүҙҙәрен дә йәшерҙе. Берәүһе генә: "Нимә, минең урын да минең урын тиһең дә йөрөйһөң?.. Кондукторһыңмы ни!?" - тиергә уҡталды ла туҡталды.

Ваҡланды, буғай, абзый. Оҙон ғүмерендә, бәлкем, ысынлап та ҙур эштәр эшләп йөрөгәндер ҙә ул, шуларҙы, һаҡһыҙ ҡыланып, иҙәнгә төшөрөп сатнатты.

Заманың менән бергәрәк атла шул барыбер ҙә. Ябай әйткәндә - ҡартая ла бел.

## ҠАТЫНДАР АҠЫЛЫ

- Ана, уй Аллам, кем, Рәил балаҡайым, тиҙ генә атайыңды сығып туҡтат!.. - гел көләс йөҙлө, йомшаҡ һүҙле апайҙың түрбаштан шулай тигәне ишетелде. Ҡапыл эшләр эш килеп сығыуы айҡанлы ҡабалан әйтелгән һүҙҙәре лә ҡаты яңғыраманы. Гел шулай ул уның.

Донъя көтөүгә әүәҫ апайҙың балалары ла бигерәк асыҡ зиһенле: йәйге каникулға ҡайтҡан Рәил ике ҡабатлатманы, ноутбукта шаҡылдап ултырған еренән ырғып торҙо ла тышҡа атылды:

- Ата-а-й!..

Ләкин апай быны көтөп торманы, телефонға йәбеште. Ана - йомшаҡ, наҙлы тауышы менән иренә өндәшә лә:

- Китмәй тор, сығам!..

Шулай тине лә, солангдан аяҡ кейемен һәрмәй һалып кейеп, урамға сығып та йүгерҙе.

Бер нисә минуттан йөк машинаһының ауыр ҡуҙғалып киткәне ишетелде. Ҡапҡа шаҡылданы, солан ишеге шығырҙаны, йорттоҡо тоноҡ шапылданы.

- Өй ҡатаһы менән китеп бара ине бит, итек бирҙем. Хәҙер бит көндәр көҙгә тартым, урманда һалҡын, - тип аңлатма бирҙе хужабикә, бая баҫып торған һалмаһына йәнә тотоноп.

Йә, шул түгелме ҡатындар аҡылы?

ҠОТ

# ҠАРТӘСӘЙЕМ ӨЛГӨҺӨ...

## минең балаларыма ла ҡағылһын

**Күптәр үҙенең өләсәһен йәки ҡартәсәһен иң яҡын кеше, беренсе кәңәшсе, тип иҫәпләй. 95 йәшен тултырып, ошо көндәрҙә гүр эйәһе булған атайымдың әсәһе - Ғәбиҙә ҡартәсәйебеҙ ҙә беҙҙең күңелдәрҙә тик яҡты иҫтәлектәр генә ҡалдырҙы. Уның һәр ҡылығы, эшләгән эше, һөйләгән һүҙе айырыуса бер ҡот булып күңелдәргә яғылыр ине. Иң мөһиме, ул был тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәй белде, беҙҙе, балаларын да шуға саҡырҙы гел.**

Ғөмүмән, ҡартәсәйемдең бик күп сифаттарын замандаштарым өсөн өлгө итеп ҡуйырға булыр ине. Мәҫәлән, һәр нәмәне уңлы-һуллы һелтәп, тәләфләргә яратҡандарға уның һаҡсыллығын ҡаршы ҡуйыр инем. Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа 6 балаһы менән тол ҡалып, ир урынына ла, ҡатын урынына ла тормош йөгөн егелеп тартҡанға күрәлер, бөтә нәмәгә лә һаҡсыл булды ул. Кәкерәйеп ятҡан ҡаҙаҡты ла сүкеш менән төҙәтеп, кәрәге тейер әле, тип һаҡлап һалып ҡуйыр ине.

Ҡартәсәйебеҙ иҫке әйберҙәрҙең дә ҡәҙерен белде. Кейерлектән сыҡҡан әйберҙәрҙе бер ваҡытта ла сығарып ташлатманы. Уның боронғонан ҡалған балаҫ һуға торған станогы булды. Иҫке кейемдәрҙе, ҡорамаларҙы буй-буй итеп телеп, төҫлө балаҫтар һуҡты. Өйөндә ул ултырған урындыҡ өҫтөндә үҙ ҡулы менән һуғылған балаҫтар, ултырғыс япмалары, буй юрғандар булды. Яҡын кешем уларҙың һәр биҙәген барлап, быныһы - әсәйемдән ҡалған күлдәктең ҡорамаһы, быныһы - ҡартатайың алып ҡайтҡан бүләк ине, быныһы - инәйең алып биргән туҡыманан, тип яҡты иҫтәлектәргә бирелеп китер ине. Ҡартәсәйемдең һөйләгәндәрен тыңлап, был ҡорамалар үҙе бер ғүмер икәненә күп тапҡырҙар инанғаным булды. Ошо ҡорама балаҫтары менән дүрт ҡыҙын, күп һанлы ейәнсәрҙәренең һәр береһен кейәүгә оҙатты. Ҡартәсәйемдең фатихалары ла ҡотло булды. Хәҙер бөтә балаһы ла бик татыу ғаилә ҡороп, матур итеп донъя көтә.

Ҡартәсәйемдең донъяһы ла һәр ваҡыт таҙа, бөхтә булды. Өйөнә барып инһәң, шунда уҡ һине ниндәйҙер йылылыҡ сорнап алыр ине. Тимәк, ҡартәсәй егәрлеге менән шундай мөхитте тыуҙыра белгән.

Ҡартәсәйемдең зауыҡ менән кейенә белеүе үҙе бер мөғжизә ине. Күлдәктәрен үҙе үк бесеп, ҡыҙы Фирҙәүес инәйемдән тектерер, үҙ зауығына ярашлы рәүештә балитәктәр ҡуйҙырыр, алғы яғын мотлаҡ артҡы итәктәренән ҡыҫҡараҡ итер ине. Алғы итәктәр эш эшләгәндә, атлағанда ҡамасауламаһын өсөн шулай тегелгәндер инде. Кеше араһына сыҡҡанда, ҡунаҡҡа барғанда өҫтөндә сифатлы тауарҙан бик матур итеп тегелгән сағыу күлдәге, өҫтөндә сигеүле камзулы, башында шау сәскәле яулығы, иңендә сәсәкле шәлъяулығы, аяҡтарында ситектәре булды. Ә беләктәрендә - һырлап эшләнгән, ниндәйҙер доғалар яҙылған көмөш беләҙектәр. Ҡунаҡтан ҡайтҡас, шул кейемдәрен айырым бер бөхтәлек менән тәңкләп, тәҫләп шифоньерға һалып ҡуя ине. Беҙҙе лә бәләкәйҙән шундай бөхтәлеккә өйрәтте.

Яҡын кешебеҙ аш-һыуға ла бик оҫта ине. Уның табыны һәр саҡ мул, килгән кешеләргә йөҙө яҡты булды. Ҡартәсәйем киң күңелле, йомарт булған өсөн, өйөнән кеше лә өҙөлмәне. Өҫтәлендә һәр саҡ ҡорот, сейәле май, еләк ҡайнатмаһы, күпереп бешкән икмәк булды. Ҡыҙҙарын, кейәүҙәрен ҡунаҡҡа саҡырғанда ҡаҙан тултырып ит һалыр, һыйы мул булыр ине. Килгән кешене риза итә белер ине. Әммә үҙе майлы ризыҡтарҙы бик ашап та барманы. Оҙаҡ йәшәүенең сере, бәлки, шундалыр ҙа, тип фаразлайым бөгөн.

Бөгөнгөләй хәтеремдә: бәләкәй кластарҙа уҡығанда атаәсәйем көнө буйы эштә булғанлыҡтан, ҡартәсәйем урамда уйнап йөрөгән еремдән саҡырып, сәй эсереп сығарыр ине. Иң тәүҙә алдыма бер сеүәтә ҡатыҡ һалып, ашап бөткәс, ағас ҡалаҡты, сеүәтәне мотлаҡ ялап ҡуйырға ҡуша ине. Хәҙер аңлайым: был ҡартәсәйемдең ризыҡты тәләф итмәҫ өсөн күрелгән бер сараһы булған икән. Икмәк тотоп ашап йөрөгән ваҡытта ла "Алла бабай башыңа һуғыр, ултырып, икмәк валсығын төшөрмәй генә аша", тип тыя торғайны.

Ҡартәсәйем һәр саҡ балаларына, ейән-ейәнсәрҙәре, бүлә-бүләсәрҙәренә аҡыллы кәңәштәрен әйтеп, доғаларын уҡып, фатихаларын биреп ултырҙы. Буй еткән ейәнсәрҙәрен ҡурсып:

- Ҡуй, балалар, клуб-млуб тип сабып та йөрөмәгеҙ. Сыҡманым да, йөрөмәнем дә, барыбер матур, аҡыллы, уҡыған кешегә кейәүгә барҙым. Насибы табыла ул, һиңә лә яҙғаны йөрөйҙөр, - тип ҡабатларға яратты.

- Ә ҡартәсәй дөрөҫтө һөйләгән икән, - тиҙәр хәҙер минең кейәүҙәге апайҙарым.

Уның кәңәштәре, тормош тураһындағы фекерҙәре миңә лә ярҙам итеп, киләсәктә лә кәрәге тейәсәк әле. Алла бирһә, киләсәктә ҡартәсәйемдән ҡалған аҡылдарҙы барлап, үҙ ейән-ейәнсәрҙәремә аҡыллы өләсәй булып ултырыу тураһында хыялланам.

**Милә БИЛАЛОВА.**

ЗАУЫҠ

# ЯҢЫ БЫУАТ БӘЙЕТЕ

Мөғжизәләр менән тулы фани донъя,
Телһеҙҙәр ҙә телмәр тота булып даръя.
Тормағандар атлап китә, Хоҙай ҡушһа,
Әйткәнемде яҙып бар, тип, миңә ҡуша.
...Ер йөҙө бит бер мөғжизә - шул яуаптыр,
Фаразлайҙар ул барлығын мең быуаттар.
Бихисапһыҙ мәхлүк йәшәй тәбиғәттә,
Ышанмай тик кеше генә тәғлимәткә.
Үҙен үҙе бөтөрөргә гел баш вата,
Һинең халҡың яһамай тик ундай хата.
Еткерергә уға шуға үтенесем:
**Сабыр бул һин һәм бул һин телсем.**

Сабыр бул һин, сабырлыҡтың төбө - алтын.
Боронғолар юҡҡа ғына әйтмәгәндәр.
Олтанлыҡты солтанлыҡтан өҫтөн күреп,
Үҙ иләндә сабыр ғына көн иткәндәр.
Әмир, батша һәм башҡалар килгән-киткән,
Заманында Алтын Урҙа хатта бөткән.
Тик йәшәгән ырыу-ырыу аҡ бабалар,
Үҫтергәндәр һинең кеүек ир балалар.
Кәрәк булһа, илен яҡлап яу сабырлыҡ,
Форсат сыҡһа, ерен данлап моң һалырлыҡ.
Батшаларға баш эймәгән һинең ырыу,
**Сабыр бул һин һәм бул һин ғорур.**

Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең балалары
Мең быуаттар төйәк итте Урал ташын.
Һыйҙырғанда үҙ янына башҡаларҙы
Һөмһөрөн ҡойоп йыйырманы бабаң ҡашын.
Ғорурлығын бер ваҡытта юғалтманы.
Хужа булды, донъяларҙы тарҡатманы.
Аңлағандар бабаңдың был сәйәсәтен
Алмаштырҙы уға ҡарап үҙ йәһәтен.
Ҡабул итте ырыу тотҡан ғөрөфтәрҙе,
Ә халҡыңа тағы бик күп бәҫ өҫтәлде.
Улыңа ла еткер минең әйкәнде, ай,
**Сабыр бул һин һәм бул һин атай.**

Ҡәмһетәләр мине, тип, һәр ваҡыт та,
Йәберләмә һин үҙеңде бер саҡта ла.
Йүләрлектән өҫтөн булған кеше генә
Бөйөк һәм саф күңелле була ала.
Яйлап ҡына үҙеңә тиң дуҫ-иш һайла,
Дуҫлыҡ беҙҙең мәңгелек, тип оран һалма.
Алла ғына мәңгелек бит был донъяла
Башҡа нәмә тарих саңы булып ҡала.
Донъя баҫҡан дәүләттәр ҙә тарҡалалар,
Бәғзе халыҡ ҡыҙыу булып юҡ булалар.
Күрше булған ғуҙ һәм хаҙар быға миҫал
**Сабыр бул һин һәм бул һин уҫал.**

Берҙәй ҡарай көнсығышҡа, көнбайышҡа ике башы,
Һине арбап тарих яҙа сәмреғошо.
Фәһемле, тип, уҡыма тик бер китапты,
Эҙлә, тап, сағыштыр бар сығанаҡты.
Ата-бабаң булмышы күп шәреҡтә лә,
Онотһон тип, бәғзе берәү теләһә лә.
Ике тапҡыр хәрефеңде алмаштырған,
Өсөһөн дә өйрән, һин отолмаҫһың.
Бындай бәхет бер кемгә лә тәтемәгән.
Зәки бабаң Бохарала күп эҙләнгән.
Ул тапҡанды тағы ла һин ныҒыраҡ байыт,
**Сабыр бул һин һәм бул һин талип.**

Бурҙар, бур һин, тип тамаҡ яра, аптырама,
Харамдыҡы харам инде, эсен ҡыра.
Хәләл генә һәр ваҡытта көстә ҡала,
Бер тибәрһең ундайҙарҙың арт һанына.
Ата-бабаң хәреф танып намаҙ ҡылды.
Наҙан ғына, наҙандар, тип һөрән һалды.
Белһен өсөн барса ғәлләм барыһын да,
Иҫбатлансы йән иҫәбе барышында.
Уҡымышлы булды һәр саҡ барса халҡың,
Шул кимәлде күтәрергә барсы хаҡың.
Уҡы, улым, ярҙам итәм, килә хәлем,
**Сабыр бул һин һәм бул һин ғалим.**

Монгол менән килгәнде лә һин ҡурсала,
Уны ла бит кесе айыу ҡыҫып бара.
Күп мин, тип бөгөнгө көн маһайһа ла,
Йота алмаҫ мишәрҙе лә, майлаһа ла.
Йәш бит әле, ул да аңлар бара-бара,
Ҡыҙыу халыҡ тиҙ тарҡала был донъяла.
Дыуамалдар алған саҡта ләззәт тапһа,
Олпатлылар ҡуйғас ҡына йәннәт ҡыла.
Юҡ бит уның һыйынырлыҡ ере башҡа,
Аңлағаны һиңә ҡарап күҙен баға.
Рәхмәтлеһе бик күп улар араһында,
**Сабыр бул һин һәм бул һин уға аға.**

Ҡояш та бит үтә ҡыҙыл - бик тиҙ уңа,
Ҡыҙыу кеше һәр ваҡытта боҙҙай туңа.
Ғалимдар ҙа күптән инде иҫбат иткән
Нәфсе тигән яман сирҙе, шуға икән.
Үткән быуат бар донъяны дер һелкеткән,
Айыуҙың да бөгөн килеп хәле бөткән.
Башлағанды Барый батша үткәнендә
Тамамларҙар һинән башҡа үҙҙәре лә.
Йөҙ йыл элек суфый бабаң яҙып ҡуйған,
Уландарым, сабыр булың, килер заман.
Шул яҙманы алыр өсөн бөгөн уҡый,
**Сабыр бул һин һәм бул һин суфый.**

Ҡара алтын бәҫе китер баҙарҙарҙа,
Ҡап ҡорһаҡтар бет үрсетер ул сағында.
Ерле генә ерҙә ҡаты баҫып торор,
Кемлегеңде барһы күрер шул саҡтарҙа.
Ата-бабаң ерҙе тотҡан ырыу менән
Шуға тағын бөгөнгө көн яйы килгән,
Ҡабыҡ һуғып, сәүкә ҡыуып дау күтәрмә,
Ҡанун менән ал ҡулыңа үҙ ереңде.
Ата ла ул, әсә лә ул - ереңһаҡла,
Баҙар хаҡы текә тип, уны һатма,
Ереңбулһа, балаларың күрмәҫ нужа,
**Сабыр бул һин һәм бул һин хужа.**

Байлыҡ тип, ҡыуалама донъя атын,
Күрһәтер ул, ҡабаланһаң, һиңә артын.
Һаулыҡтан да ҡиммәтерәк юҡ донъяла,
Ҡыйылмаһын кеше ғүмере бер заяға.
Үҙгәрештәр була ала ҡанһыҙ ғына,
Низағ эштәр хәл ителһә сабыр ғына,
Һәр бер низағ тамамлана солох менән,
Айырмаһы ҡорбан иткән дәүмәл икән.
Туған менән тапҡаныңды тоғро бүлеш,
Ҡылығыңдан рәнйемәһен күрше-белеш.
Еткерергә үҙ халҡыңа бындай сәләм,
**Сабыр бул һин һәм бул һин сәсән.**

Аҡыл менән эш итергә һәр заманда
Васыят итә суфый бабаң яҙмаһында.
Көслөнөкө көслө генә булған саҡта
Аҡыллының ике илле өҫтөн ята.
Зыялылар йыйылышып кәңәш итер,
Юлың уңыр халҡың менән, илсе ебәр.
Милләттәрҙе берләштергән ойошмаға,
Ул тарафта көслө лә бит ҡойолоп ҡала.
Килер заман, инша Алла, күп ҡалмаған,
Ул юҫыҡҡа бәғзе халыҡ һуҡмаҡ һалған.
Донъяла ла яңы быуат инде хәҙер
**Сабыр бул һин һәм бул һин әҙер...**

**Суфый бабай бүләһе**
**Улына бәйет әйткәне,**
**Яҙып алды ишеткәнде**
**Рөстәм НУРЫЙ ейәне.**

✓ *Себен үрмәксе ауына ҡапҡан кеүек, улар ҙа интернет ауына эләгә. Был ауға бер эләккәс, ай-һай, айырылыуы ҡыйын. Бөтә эштәрен онотоп, тик шунда ултырыусылар бар.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ДӨРӨҪ ҠУЛ ЙЫУЫРҒА...
## рэп өйрәтер

■ The Daily Telegraph хәбәр итеүенсә, Британия дәүләт дауаханаһы етәкселеге ҡул йыуыу техникаһы тураһында йыр уйлап табыуҙы ойошторған. Рэп жанрындағы был композицияны Милтон-Кинс дауаханаһы хеҙмәткәрҙәре ижад иткән һәм башҡарған. Табиптар фекеренсә, был йырҙы ҡул гигиенаһы тураһында пособие итеп ҡулланып буласаҡ. Clean Hands Rap тип аталған был йыр буйынса минут ярымлыҡ клип та төшерөлгән.

■ Табиптар һәр төрлө диета ла сәләмәтлек өсөн зыянлы, тип белдерҙе лә, Израиль ғалимдары өс төрлө диета - түбән калориялы, углеводтар кимәле түбән булған һәм урта диңгеҙ диетаһы атеросклероз үсешенә тотҡарлыҡ яһай ала, тип раҫлай. Бен-Гурион университеты белгестәре урта йәштәге 140 ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ араһында тикшеренеүҙәр үткәрә. Ҡатнашыусылар ошо өс диета буйынса ғына туҡлана. Уларҙың ҡайһылары артериаль баҫымды түбәнәйтеүсе һәм ҡандағы холестерин кимәлен контролдә тоторға ярҙам итеүсе дарыуҙар ҙа ҡабул итә. Ҡан тамырҙарын ультратулҡынлы сканер аша төшөрөп, тикшеренеүселәр каротид артериялары стеналарының, йәғни башлыса йөрәкте ҡан менән тәьмин итеүсе төп ҡан тамырҙарының ҡалынлығын даими тикшереп тора. Тәжрибә ике йыл буйына бара һәм ошо ваҡыт эсендә артерияларҙың ҡалынлығы һәм күләме һиҙелерлек кәмей. Бынан тыш, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар юғары ҡан баҫымынан һәм артыҡ ауырлыҡтан да ҡотола.

■ Күңелегеҙ төшөнкө мәлдәрҙә шоколад йәиһә крекер ҡабып ҡуйырға ғәҙәтләнһәгеҙ ҙә, табиптар был аҙыҡтарҙы шыттырылған бойҙай, арпа, ҡуҙаҡлылар салаты менән алыштырырға тәҡдим итә. Әүҙем шытыу осоронда (был бер тәүлек самаһы дауам итә) уларҙа үҙенсәлекле фермент бүленеп сыға. Был фермент шытҡан бойҙай йәки арпа составында булған, мускулдарҙы нығытыусы, нервы һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшен яйға һалыусы Е һәм В төркөмө витаминдарын, хром, литий һәм калийҙы яҡшыраҡ үҙләштерергә ярҙам итә.

■ Көҙ миҙгелендә һалҡын алдырып ауырыусылар күбәйә. Аҡһымлы һәм майлы аҙыҡты эшкәртеү өсөн күп энергия һәм ваҡыт сарыф ителә. Ә ауырыған саҡта организмдың көсө инфекция менән көрәшеү өсөн йүнәлтелгән булырға тейеш. Шулай булғас, туҡлыҡлы аштарҙы кәметеп, күберәк емеш-еләк, бигерәк тә әфлисун, мандарин, лимон, сей йәки быҡтырылған йәшелсә, һыуҙа бешерелгән йәки быҡтырылған балыҡ ашарға, һут эсергә кәңәш ителә. Киҙеү вирусы әсе мөхитте яратмай, шуға ла нарзан кеүек минераль һыуҙарҙы күберәк эсеү яҡшыраҡ, ул бауырҙан ҡабул ителгән дарыуҙарҙы ла сығарырға ярҙам итә.

■ Япон ғалимдары ҡанында омега-3 юғары булған кешеләр был кислота етешмәгәндәргә ҡарағанда күпкә тынысыраҡ һәм аралашыусыраҡ булыуын асыҡлаған. Баҡтиһәң, ни тиклем төндәр оҙонораҡ, шул тиклем мейелә "шатлыҡ гормондары" серотонин аҙыраҡ бүленә. Ә был кислота был гормондың бүленеүендә ҡатнаша ла инде. Омега-3 мейе күҙәнәктәре үсешендә ҡатнаша һәм күҙәнәк-ара бәйләнеш өсөн яуап бирә, тимәк, хәтер яҡшыра. Әгәр ҙә ата-әсә балаһына составында омега-3 булған аҙыҡ-түлек ашата икән, ул артыҡ әүҙемлек синдромы менән һирәгерәк яфалана һәм яҡшыраҡ уҡый. Был кислота майлы балыҡтарҙа, үсемлек майҙарында, диңгеҙ продукттарында күп. Бынан тыш, омега-3 кислотаһын дарыуханаларҙан һатып алып була.

*ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ*

# ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРҘӘРЕНӘ ИНЕП...




## файҙа алаһыңмы, әллә зыянмы?

**Бөгөн халыҡ тулыһынса тип әйтерлек виртуаль аралашыуға бирелеп бара: йәштәр генә түгел, ололар ҙа интернеттағы "В контакте", "Одноклассники", "Мой круг" кеүек виртуаль ижтимағи сайттарҙа үҙенең эшен, ашарын онотоп, сәғәтләп ултыра, "хаттар" яҙа, видеороликтар, фотолар ҡарай, дуҫтары тураһында мәғлүмәттәр уҡый, дуҫтарының бөгөнгө яңылыҡтарын белә. Бындай мауығыуҙар тураһында йәштәр үҙҙәре ни уйлай?**

**Айнур ХӘЙҘӘРОВ:** Минеңсә, интернет селтәрҙәрендә көн һайын сәғәтләп ултырыусыларҙы ниндәйҙер кимәлдә наркомандар менән дә сағыштырып булалыр. Бүлмәләш дуҫымдың "В контакте" сайтынан сыҡҡаны юҡ, тип әйтһәм, алдашыу булмаҫ. Ул бүлмәгә ҡайтып ингәс тә, аяҡ кейемен дә сисмәй, иң беренсе компьютерын тоҡандыра һәм интернетҡа инеп китә. Йүнләп йоҡламай, мөһим эштәрен онотоп, тик шунда ғына ултырыуын белә. Әрләп тә, әйтеп тә ҡарағаныбыҙ бар. Бәлки, бер аҙҙан был мауығыуы үтер, сөнки күптәр әйтеүенсә, бындай селтәрҙәрҙә ултырыу башта ғына ҡыҙыҡ була, ә һуңынан ялҡыта. Әйткәндәй, интернетта асҡан файлды тулыһынса юйып булмай, ә тик үҙең тураһындағы мәғлүмәттәрҙе генә юҡҡа сығарып була. Был, күрәһең, ошо селтәрҙәрҙе уйлап табыусыларҙың берәй хәйләһелер инде.

"В контакте"ла башҡортса төркөмдәр күбәйгәндән күбәйә. Унда башҡорт йәштәре үҙ-ара таныша, аралаша, фекерҙәре менән уртаҡлаша, башҡорт йырҙарын тыңлай, клиптар ҡарай ала. Әйткәндәй, мин үҙем дә быға тиклем күрмәгән күп йырҙарҙың клиптарын нәҡ ошо сайттан ҡараным. Башҡорт йәштәрен ниндәйҙер кимәлдә бергә туплауҙа, уларға милли рух биреүҙә был төркөмдәрҙең дә өлөшө барҙыр, бәлки.

Ғөмүмән, был мауығыуҙар файҙа килтерәме, зыянмы, һәр кемдең үҙенән тора инде. Сама белеп кенә ҡулланғанда, үҙенә файҙа ала белгәндә (мәҫәлән, шул уҡ башҡорт, ислам төркөмдәренән фәһемле видео роликтарын ҡарау) яҡшылыр. Ә инде башкөллә шул донъяға сумғанһың, айырыла алмайһың, ваҡытыңды бушҡа уҙғараһың икән, был мауығыуҙарҙы ваҡытында туктатыу кәрәк булыр.

**Гөлфинә СОЛТАНОВА:** "В контакте"ның зыяны күберәк, тип уйлап бирергә әҙермен, сөнки интернет аша аралашыуға ҡарағанда, дуҫтарыңдың хәлен күреп белеү күпкә яҡшыраҡ, тип һанайым. Икенсенән, бында теркәлгән һәр кешенең шәхси тормошо бөтә донъяға асыҡ - быны мин өнәп етмәйем. Шулай уҡ фотоларҙы ла ҡуймаҫҡа кәрәктер, тип һанайым, сөнки ул фотоларҙы кем теләй, шул ҡарай ала, ул кешенең һинең турала ни уйлауын ҡайҙан беләһең, күҙ ҙә тейеп ҡуйыуы бар. Шулай уҡ виртуаль аралашҡан ваҡытта кеше үҙендә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ тоймай. Дөйөм алғанда, әгәр реаль тормошта бер ниндәй ҙә бәйләнеш булмаһа, бындай интернет селтәрҙәрендә аралашып ҡына дуҫтар менән дуҫлыҡ нығынмай, ысын яңы дуҫтар табылмай. Ә бына тәү башлап танышыу өсөн "В контакте" бик ҡулай әйбер. Бик күп егет, ҡыҙҙарҙың "В контакте" селтәре аша танышып дуҫлашҡанын, хатта ҡауышҡанын беләм.

**Зилә ВӘЛИТОВА:** Йәштәр хәҙер шул виртуаль донъяла ғына йәшәй бит, шунда аралаша, шунда уҡ бүләктәр ебәрешә, комплименттар алыша, фекерҙәрен яҙа, һ.б. Себен үрмәксе ауына ҡапҡан кеүек, улар ҙа интернет ауына эләгә. Был ауға бер эләккәс, ай-һай, айырылыуы ҡыйын. Бөтә эштәрен онотоп, тик шунда ултырыусылар бар. Хатта үҙҙәренең юҡ-бар менән булыуын, сама белергә кәрәклеген аңлаған хәлдә лә улар был селтәрҙәрҙән тиҙ генә айырыла алмай. Ә хәҙер унда кешеләр аралашыуға ҡарағанда, күберәк төрлө уйындар уйнай. Уйнай-уйнай аҡсаларын бөтөрәләр. Унда алдашыуҙар күп, кешеләр тураһында төрлө ғәйбәттәр таратыла. Был проекттарға нигеҙ һалыусылар башта уҡ кешенең үҙен донъяға таныторға теләүен күҙ уңында тотҡан. Был ынтылыш хатта башҡа кешеләр менән аралашыу, абруй ҡаҙаныу теләгенән дә алдараҡ килә, тиҙәр бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был селтәрҙәр араһында үҙенең популярлығы буйынса "В контакте" иң алда бара. Бөгөнгө көндә хатта башланғыс мәктәп уҡыусыларының да "В контакте"ла үҙ биттәре бар! Улар унда көнө-төнө тигәндәй, дауамлы уйындар уйнау менән мауыға. Был уйындар бик зарарлы. Беренсенән, компьютер алдында оҙаҡ ултырыу баланың һаулығына зыян килтерә, икенсенән, бындай аралашыуҙар уның фекерләүен сикләй, өсөнсөнән, дауамлы уйындарҙы йыш уйнау арҡаһында баланың психикаһы боҙола башлаясаҡ. Ата-әсәләр ошоно күҙ уңында тотһа ине, тибеҙ.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

### Картуф ҡабығы хаҡында

**Картуф ҡабығында файҙалы матдәләр һәм витамин күп, тигән фекер киң таралған, ләкин диетологтар уның менән килешмәй.** Киреһенсә, ҡабыҡта үҫеҙ һәм бактерияларға, шулай уҡ ҡороткостарға ҡаршы һиптерелгән ағыулы препараттарҙың зарарлы матдәләре тупланыуы бик ихтимал. Улар хатта картуф бүлбеләрен йыуғандан һәм бешергәндән һуң да һаҡланып ҡалырға мөмкин. Бынан тыш, ҡабыҡта эс китеүгә сәбәпсе соланин булыуы билдәле. Иң һәйбәте - картуфты ҡабыҡлай бешереп, шунан әрсегәс кенә файҙаланыу. Был осраҡта файҙалы матдәләр ҡабыҡтан бүлбеләргә күсеп өлгөрә.

### Көнөнә - бер йомортҡа

**Колумбия университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре йомортҡа ашауҙың йөрәк өсөн зыянлы булыуы тураһындағы нығынған фекерҙе кире ҡаға.**

Йомортҡала холестерин күп, әлбиттә, ләкин организмында холестерин юғары кимәлдә булған кешегә лә хатта көнөнә бер йомортҡа ашауҙың зыяны юҡ, сөнки май барлыҡҡа килеүҙе һәм уның ҡандағы миҡдарын организм үҙе көйләй. Әгәр аҙыҡ менән бергә артыҡ кимәлдә холестерин эләккән хәлдә лә организм уны эшләп сығарыуҙы кәметә ала.

### Кис туҡланыуҙан ҡурҡмағыҙ

**Ҡайһы берәүҙәрҙең көндөҙ аппетиты булмай, шунлыҡтан, улар киске сәғәттәрҙә туҡланыуҙы өҫтөн күрә.** "Киске 6-7-нән һуң ашамаҫҡа", - тигән саҡырыу-тыйыуҙар һуңғы ваҡыт бик йышайып китеүгә ҡарамаҫтан, немец табиптары бында бер ниндәй ҡурҡыныс-хәүеф-хәтәр, шикшәбһә күрмәй. Төндә матдәләр алмашыныуы яй бара, шунлыҡтан, киске сәғәттәрҙә ашарға ултырыусылар һимерә, тигән ҡараш дөрөҫ түгел, ти улар. Ғәҙәттә, тупланған калориялар иҫәбенә, юғары калориялы ризыҡ яратыусылар һимерә, ә туҡланыу ваҡытының бында ҡыҫылышы юҡ.

### Яңы күҙәнәктәр

**Барселона университеты ғалимдары шундай мөһим асыш эшләгән: инсульт кисергән ете пациенттың баш мейеһе тукымаһында улар яңы нервы күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүен асыҡлаған.**

Мейеләге зыян күргән зонала бүленеүсе күҙәнәктәр һаны һәм яңы нервы күҙәнәктәре артҡан. Ошоға тиклем фән, кеше мейеһе үлгән нервы күҙәнәктәре урынына яңыларын эшләп сығара алмай, тигән фекерҙә тора ине. Испания ғалимдары, был яңы мәғлүмәттәрҙең инсультҡа дусар булған пациенттарҙы дауалауҙа ярҙамы ҙур буласаҡ, тигән өмөттә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

ТЕЛМӘРЕҢ ҠАЛАЙ?

**Күптәр өсөн бөгөн ҡыҫҡырыу норматив булмаған лексика булыуҙан туҡтаны. Бөгөн үҙ-ара күптәр ошондай "тел" менән һөйләшә. Әммә ҡыҫҡырышыу - әҙәпһеҙлек кенә түгел, ул һаулыҡҡа ла кире йоғонто яһай.**



# КЫҪКЫРЫШЫУ...

## әҙәпһеҙлек кенә түгел

### Әрләшмә!

Һүҙҙәр һәм уйҙар кешене уратып алған мөхитте үҙгәртергә һәләтле. Ҡайһы бер йорттарға инһәң, унда үҙеңде шул тиклем еңел хис итәһең, ә икенселәрендә - киреһенсә. Был йорттарҙа йәшәүселәрҙең бер-береһенә ҡарата булған мөнәсәбәте һөҙөмтәһе. Әгәр йортта һәр ваҡыт ирешәләр, ҡыҫҡырышалар, бер-береһе тураһында насар уйлайҙар икән, был йорттоң аураһы яҡшы булмаясаҡ. Бөгөн был "мәғлүмәт эҙҙәрен" объектив химик-физик ысулдар менән үлсәргә мөмкин. Универсаль энергомәғлүмәти анализатор - махсус прибор һыуҙы тикшереп, уратып алған мөхиттең торошон билдәләй. Әгәр миҫал өсөн урындағы шишмә һыуын алып, уны ниндәйҙер йоғонтоларға юлыҡҡан һыу менән сағыштырып ҡараһаҡ, улар төҙөлөшө буйынса төрлө килеп сыға, йәғни төрлө йоғонтолар (сәнәғәт, физик, мәғлүмәти) һыуҙың төҙөлөшөндә сағылыш таба. Әшәке һүҙҙәр норманан бик киҫкен тайпылыш бирә.

Бының организмға тәьҫир итеүе мөмкинме? Беҙҙең организм 70-80 процент һыуҙан тора, тимәк, шулай уҡ уратып алған арауыҡҡа көйләнә. Үҙгәреүҙәр хатта генетик кимәлдә булыуы мөмкин.

### Яҡшылыҡ тураһында уйла!

Кеше йәмһеҙ һүҙҙәрҙе ниндәйҙер киҫкен хәлгә тарыған ваҡытта йә матур телмәр менән һөйләшә алмағанда әйтеп ебәрә. Беренсе осраҡта ул организмға әҙәм, ә икенсе осраҡта һүлпән кире йоғонто яһай. Һүлпән йоғонто яһай, тип әйтһәк тә, ул үҙенең һәләкәтле тәьҫир итеүен һаҡлай, сөнки әрләшеү һүҙҙәрен даими ҡулланыу организмдағы ағзалар эшмәкәрлеген үҙгәртергә мәжбүр итә. Әшәке һүҙҙәр әйләнә-тирәне лә боҙа. Шундай мөхиткә эләгеп, организм насар тәьҫиргә көйләнә башлай. Әгәр әңгәмәсегеҙ күңелегеҙгә ятмай икән, эстән уй ярҙамында икегеҙ араһына быяла ҡуйығыҙ.

Йортта кемдер әрләшһә, көсөргәнешлекте шәм тоҡандырып бүлмә буйлап йөрөтөп сисергә мөмкин. Ут тирә-йүндә тиҙ полярлаштыра һәм насар тойғоларҙы юя. Яңы мөхит барлыҡҡа килә. Юҡҡа ғына был ысул сиркәүҙәрҙә ҡулланылмайҙыр.

### Доға ҡыл!

Доға ҡылынған урында сирлеләр тиҙерәк йүнәлә, сөнки доғалар һәр кемгә ыңғай йоғонто яһай. Шул уҡ ваҡытта доғаны ни тиклем ихлас уҡыу ҙа мөһим. Әгәр ҙә текст механик рәүештә уҡылһа, уның бер ниндәй ҙә тәьҫире булмаясаҡ. Был һәр төрлө теоретик файҙалы йоғонтоға ҡағыла. Күптән түгел бер классик музыка концертында тикшеренеүселәр әйләнә-тирәләге мөхиттең хәлен үлсәгән. Күҙ алдына килтерәһегеҙме, улар ҡулланған бөтә ысулдар йырҙың кире йоғонтоһон күрһәткән. Уйлап ҡараһаң, солистар ҙа насар түгел, техник яҡтан да теүәл башҡаралар... Тимәк, улар концертты ысын күңелдән түгел, ә яһалма рәүештә ойоштороған. Шулай булғас, беҙгә тик яҡшы уйҙа ғына булырға кәрәк!

ТУҠЛАНЫУЫҢ НИСЕК?

# ТЕРЕ ҠАТЫҠ ЭС -

## бер айҙан йәшәреп китерһең

**Әгәр ябығырға кәрәк булһа, нимә эшләргә? Күнекмәләрҙән һуң яңынан көс ҡайтарыу өсөн нимә эсергә? Көндө нимәнән башларға? Уны нисек тамамларға? Бының өсөн һеҙгә тик бер стакан ҡатыҡ эсеү кәрәк.**

Изге урын буш булмай, был шулай уҡ беҙҙең табындарға, туҡланыу ғәҙәттәребеҙгә лә ҡағыла. Егерме йыл элек илебеҙгә Көнбайыш илдәренән сағыу һауыттарға тултырылған әсетелгән һөт ризыҡтары эркелә башланы. Беҙҙә инде элек-электән был яңы продукттарҙан күпкә өҫтөн торған һөт ризыҡтары булды. Әгәр ябай "әсетелгән" һөт ризыҡтарында 1-2, ә яҡшы осраҡта 3-5 файҙалы бактерия булһа, ә быуна ҡатыҡта 22 төргә тиклем файҙалы микроорганизмдар бар. Ҡатыҡ башҡа ризыҡтарға ҡарағанда ни тиклем файҙалы икәнен күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ инде шунан. Шуны ла иғтибарға алығыҙ: беҙ бөтәбеҙ ҙә төрлө, бер организм да икенсеһенә оҡшамаған. Нәҡ ҡатыҡ эскәндә һәр кемдең ашҡаҙан һәм эсәктәре үҙенә кәрәккәнде генә һоҫоп ала, сөнки һайлап алырлыҡ мөмкинлектәр бар. Был Рәсәй Медицина фәндәре акакдемияһының күп төрлө тикшеренеүҙәрендә иҫбат ителгән.

Ҡатыҡта файҙалы микрофлора һаҡлана. Әгәр һеҙ антибиотиктар ҡулланаһығыҙ икән, организмдан шлактарҙы ла сығарыр. Әгәр ҡатыҡты даими рәүештә эсеп торһағыҙ, матдәләр алмашыныуы яҡшырыр. Егерме төрҙән ашыу файҙалы микроорганизмдар ҡайһы бер ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарын барлыҡҡа килтереүселәрҙе үлтерә. Ҡатыҡ иммунитетты нығытырға, хроник арыу синдромдарынан һәм тештәр боҙолоуынан ҡотҡарырға һәләтле.

Ул ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуға ярҙам итә һәм эсәк көбөнөң тартылыуын көсәйтә, беҙҙең организмға кальций, тимер, D витаминын үҙләштерергә, ҡиммәтле микроэлементтар юғалыуын ҡаплап, һыуһынығыбыҙҙы баҫырға ярҙам итә. Бына ни өсөн ҡатыҡты әҫелә лә, үтә ауыр эштән һуң да, әүҙем күнекмәнән һуң эсһәң дә яҡшы була. Бигерәк тә "тере" ҡатыҡ етештереүселәр күптән инде ҡулланыусылар телән үтәп, үҙҙәренең продукттарын кәрәкле өҫтәмә витаминдар менән тулыландырҙы. Ә аминокислоталар һәм А, D, Е витаминдары һөткә ҡарағанда ҡатыҡта күберәк!



Был файҙалы ризыҡ көсһөҙләнгән балансты яңынан тергеҙергә ярҙам итә. Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡатыҡ протеинлы коктейль һәм бер нисә таблетка витамин менән пробиотик кеүек үк файҙалы. Әгәр һеҙ үҙегеҙҙең рационығыҙҙа үтә файҙалы булмаған бер ризыҡты ауыл ҡатығына алмаштырһағыҙ, бер айҙан һуң йөҙөгөҙҙә лә, билегеҙ тирәһендә лә һиҙелерлек һәм күренерлек һөҙөмтә күрерһегеҙ!

Ни өсөн беҙ "тере" ҡатыҡты һыуыҡ өҫтөнә алып үттек? Ул "үле"лә буламы ни? Була! Эш шунда, етештереүселәр тере ҡатыҡ культураларын төҙөлөшө буйынса микрофлораларға ярлы ҡоро әсеткегә алмаштыра. Яҡшы аш һеңдереү һәм ваҡытынан алда ҡартайыуҙан һаҡлау өсөн беҙҙең организмға кәрәк булған ундағы бактерияларҙың бер нисә төрө асыҡтан-асыҡ етмәй. Әйткәндәй, бындай "үле" продукттар ҡатыҡ исемлегенә инмәй.

Файҙалы ризыҡты айырыр өсөн башҡа ысулдар ҙа бар. Беренсенән, һаҡлау ваҡыты: "тере" ҡатыҡ ике аҙнанан артыҡ һаҡланырға тейеш түгел. Икенсенән, ысын тере ҡатыҡ еңелсә күбекләнә. Рәсәйҙә дөрөҫ "тере" ҡатыҡ сығарыусы етештереүселәр бөтөнләй әҙәйҙе. Моғайын, был бер нисә төбәк һөт заводтарында ғына һаҡланып ҡалғандыр. Нәҡ шундай тере ҡатыҡ, йәш айырмаһына ҡарамаҫтан, бөтәһенә лә файҙалы һәм осһоҙ туҡланырға мөмкинлек бирә.

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Друидтарҙың серен нисек ҡулланырға?

Друид Коннеда ғәҙәти кеше була. Кельт булараҡ, ул үҙҙәрендә йәшеренгән Алиһә көсөн нисек ҡулланырға белгән кельт ҡатын-ҡыҙҙары менән һоҡлана. Был ҡатын-ҡыҙҙар аҡыллы, үҙ-үҙенә ышанған һәм арбау һәләтенә эйә булған.

Бөгөн дә ошо боронғо аҡылға ҡиҙһәйәләгән кельт музыкаһы тере. Бөгөнгө кельттар унда иртәгәне - сикһеҙ тормош бүләк итеүсе кельт музыкаһының тергеҙелеүен күрә.

Кельттарҙың рухи лидерҙары, друидтар, ул ваҡыттарҙа күрәҙәсе һәм аҡыл эйәһе тип һаналған. Улар мөғжизә тыуҙырған һәм мөхәббәттә күрәҙәлек иткән. Әммә төп эштәре илдең һәм ҡәбиләнең именлеген һаҡлау була. Быға тылсымлы тип һаналған саралар аша ирешкән.

Әммә улар тылсым түгел, ә нисәмә быуаттар Иисус өйрәткән, кешеләр насар үҙләштергән һәм хәтерҙәрендә насар һаҡлаған һабаҡ була. Ул аҡылды үҙенсәлекле ҡулланырға өйрәтә: Аллаһҡа барығыҙ, булмышығыҙ менән Аллаһ тәҡүәләре кеүек булығыҙ, һәм һеҙгә бар нәмә килер.

Хәҙерге тел менән әйткәндә, Иисус уйҙарығыҙ менән үҙегеҙгә ҡайтығыҙ, булмышығыҙға ҡайтығыҙ, ти. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ, аҡса проблемалары хәл ителгән, сәләмәтлегегеҙ яҡшырған, ижади маҡсаттар яуланған. Нисек күҙаллайһығыҙ, шул ниәтегеҙ тормошҡа аша.

Друидтар заманында кешеләр көстө ихтирам иткәндәр. Ябай кешеләр алдында үҙ аҡылының ижади мөмкинлектәре менән бүлешеү - улар менән идара итеүҙе юғалтыуға бәрәбәр булған. Бөгөн ғәҙәти булмаған ғәҙәти кеүек. Миллион, бәлки, миллиард кеше уйҙарҙың ижади көсө тураһында белә.

Шулай булғас, нинә уны файҙаланмаҫҡа? Ни өсөн кешеләр аҡсаһыҙлыҡтан интегә һәм һөйөү теләгән тыйып тора?

Яуап матди донъяның гипноз көсөндә, уның беҙҙең хистәребеҙҙе тартып алып, аңыбыҙҙы программалаштырыуында.

Киңлектең һәм ваҡыттың сиклелеге уйҙарҙың һәм тормоштоң сиклелегенә килтерә. Фекерләү, уйлау сиклелеге һөйөү һәм ижад итеү сиклелегенә килтерә. Һеҙ сикләүҙәрҙән үҙегеҙгә төрмә ҡораһығыҙ. Биш минуттан ул төрмәнең ишектәре бер ваҡытта ла ябылмағанды аңларһығыҙ.

Һеҙ ишекте асып, балҡып торған яңы - иҫ киткес бай һәм күрелмәгән мөхәббәт донъяһына инерһегеҙ. Был ике бәләкәй генә тәжрибә аша килер, улар мейегеҙҙең әлегә тиклем һеҙ уйлағандан ҙурыраҡ булыуына инандырыр. Аңығыҙ арҡаһында аңығыҙ үҙгәрер.

Аңығыҙ ярҙамында тәнегеҙ менән идара итә башларһығыҙ. Бының ысынбарлыҡ икәнлегенә инанғас, аңығыҙҙың ижади мөмкинлеген тәнегеҙҙән ситкә - йоҡо урын-ерегеҙгә һәм банк иҫәбенә йүнәлтерһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 27 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
19.00 "Побег", 3-я серия. Остросюжетный сериал
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Иван Дыховичный. Вдох-выдох"
00.50, 03.05 "На трезвую голову"
03.00 Новости
03.15 "Джесси Стоун. Смерть в "Парадайзе"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Королева тигров. Маргарита Назарова"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь". Док. драма
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 147-я серия
18.05 "Ефросинья", 156-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Была любовь", 1-я, 2-я и 3-я серии. Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Жизнь сначала". Мелодрама
01.45 "Сотня воров". Комедия
03.34 "Честный детектив"
04.05 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
11.00 "Следствие вели..."
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Футбольная ночь"
01.45 "Тугая петля"
04.00 "Братва"
04.55 "Очная ставка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины" (на башк. яз.)**
**12.35 "Семь чудес Башкортостана". "Иремель"**
**13.00 "Хрустальный соловей" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.40 "Виктория"**
**17.30 Новости (на башк. яз.)**
**17.55 Первенство России по футболу. Второй дивизион. "БИС-Динамо" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**20.00 "Спортивный интерес"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Российское кино на канале БСТ**
**00.50 Прогноз погоды**

## 28 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Гаражи". "Последний угон", 3-я серия
21.00 "Время"
21.30 "Гаражи", 4-я серии. Сериал
22.30 "Сверхчеловеки"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Оптом дешевле-2"
02.30, 03.05 "Двое на дороге"
03.00 "Новости"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 148-я серия
18.05 "Ефросинья", 157-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Была любовь". Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Так она нашла меня". Комедия
02.15 "Девушка-сплетница-2"
03.10 "Люди и манекены"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Основной инстинкт-2".
01.40 "Главная дорога"
02.15 "Марсельский контракт"
04.00 "Братва". Сериал
04.55 "Очная ставка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.15 Мультфильм**
**10.25 "Детский фильм"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Семь чудес Башкортостана". "Башкирские народные песни"**
**13.05 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.25 Концерт**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.45 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Судьбы радужные нити"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаш"**
**19.30 "Криминальный спектр"**
**20.00 "Историческая среда"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Семь жемчужин". Водопад "Атыш"**
**20.55 "Они видели Победу"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм**
**01.05 Прогноз погоды**

## 29 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Голоса", 2-я серия
21.00 "Время"
21.30 "Голоса". Мистический детектив
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Каратель"
03.00 Новости
03.05 "Капитуляция Дороти"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Лебединая песня Евгения Мартынова"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 149-я серия
18.05 "Ефросинья", 158-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Была любовь, 7-я, 8-я и 9-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Кто я?"
02.45 "Девушка-сплетница-2"
03.35 "Люди и манекены"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.20 "Морские дьяволы". Сериал
20.25 "Глухарь". Сериал
21.20 "Очная ставка"
22.15 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Рубин" (Россия) - "Барселона" (Испания). Прямая трансляция
00.25 "Сегодня"
00.45 "Каменная башка". Спортивная драма
02.35 "Свидание моей мечты"
04.30 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
05.00 "Братва"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Тивлет". Программа на чув. яз.**
**13.05 "Байык". Телевизионный конкурс любителей башкирского танца**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.45 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Тай-тулак"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Байман"**
**19.30 "Историческая среда"**
**20.00 "Личность". Я. Ильясов**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм**
**01.10 Прогноз погоды**

## 30 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Банды", 3-я серия
21.00 "Время"
21.30 "Банды". Криминальная драма
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами"
00.50, 03.05 "На исходе дня". Мелодрама
03.00 "Новости"
03.20 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 150-я серия
18.05 "Ефросинья", 159-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Была любовь". Сериал
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Семь". Триллер
02.45 "Девушка-сплетница-2"
03.40 "Люди и манекены"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
20.30 "Упасть вверх". Мелодрама
22.25 "Сегодня"
22.45 Футбол. Лига Европы УЕФА. "Зенит" (Россия) - АЕК (Греция). Прямая трансляция
01.00 "Та же любовь, тот же дождь"
03.15 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
03.45 "Братва"
04.50 "Очная ставка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Прощание с веком". М. Карим "За ту весну, что навсегда настанет"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.25 Концерт**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.45 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Хазина"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Действующие лица"**
**19.30 "Наш дом - Башкортостан"**
**20.00 "Куласа"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Шедевры мирового кинематографа"**
**01.05 Прогноз погоды**

## 1 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.10 "Жить здорово!"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
00.00 "Лига выдающихся джентльменов". Приключения
02.00 "Всю ночь напролет"
03.40 "Метрополис"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 151-я серия
18.05 "Ефросинья", 160-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2010"
22.55 "Девчата"
23.50 "Ходят слухи..." Комедия
01.50 "Проклятие-2"
04.00 "Горячая десятка"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "Чудо-люди"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Власть сна"
22.00 "НТВшники"
23.05 "Женский взгляд"
23.55 "Ты, Россия, моя Россия"
01.35 "Чарли и шоколадная фабрика". Фэнтези
03.50 "Ричард львиное сердце". Приключения

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.15 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Судьба" (на башк. яз.)**
**12.45 "Дорогие мои старики"**
**13.15 "Торжествуй, музыка!"**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Документальный фильм**
**16.10 Памяти Г. Шафикова "Чтобы дыхание захватило"**
**16.50 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Узаман"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Райхан"**
**19.30 "Криминальный спектр"**
**19.50 "Дорога без конца"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 Новости (на русск.яз.)**
**20.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**23.30 Новости (на башк. яз.)**
**24.00 Художественный фильм**
**01.00 Прогноз погоды**

## 2 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Подарок судьбы"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умники и умницы"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Смак"
10.50 "Вера Васильева. Секрет ее молодости"
12.10 "Два цвета страсти", 4 серии. Мелодрама
15.50 "Лев Прыгунов. Джеймс Бонд из Советского Союза"
16.50 "Кто хочеть стать миллионером?"
18.00 "Большие гонки"
19.15 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Детектор лжи"
22.15 "Прожекторперисхилтон"
22.50 "Шерлок Холмс"
00.40 "Чужой-3". Триллер
02.50 "Из Африки"

### РОССИЯ 1

05.15 "Ко мне, Мухтар!"
06.45 "Вся Россия"
07.00 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Как есть жареных червяков". Семейная комедия
10.20 "Субботник"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Качество жизни"
11.40 "Дела и люди"
11.55 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Назад в молодость"
15.25 "Подари себе жизнь"
15.55 "Субботний вечер"
17.55 "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.10 "Солнечное затмение". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Солнечное затмение". Продолжение
23.40 "Ложь и иллюзии". Боевик
01.30 "Дом восковых фигур". Фильм ужасов
04.50 "Городок"

### НТВ

06.05 "Люди Икс: эволюция"
06.55 "Сказки Баженова"
07.25 "Смотр"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Авиаторы"
09.20 "Живут же люди!"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Битва за Север. Беломорканал"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Преступление будет раскрыто". Детективный сериал
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум".
20.55 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Шпильки-3". Криминальная драма
00.55 "Бэтмен и Робин". Фантастический боевик
03.10 "Рой"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 Мультфильм**
**09.45 "Ребятам о зверятах"**
**10.15 "Мятежных строк цена"**
**10.45 Г. Шафиков. "Акбузат". Спектакль Сибайского башкирского государственного театра драмы им. А. Мубарякова**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Автолегенды"**
**13.00 "Дарю песню"**
**14.05 "Новое кино"**
**14.35 Художественный фильм**
**16.40 Документальный сериал**
**17.35 "Дарю песню"**
**18.40 "Вестник "Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.25 "Хрустальный соловей" (на баш. яз.)**
**20.30 "Сэнгелдэк"**
**21.00 "Судьбы радужные нити"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 Хит-парад "Етеган"**
**22.45 Художественный фильм**
**02.00 Прогноз погоды**

## 3 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Трое на шоссе"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.10 "Счастье есть!"
13.00 "Тур де Франс"
14.00 "Вся правда о еде"
15.00 "Ералаш"
15.30 "Зимний вечер в Гаграх"
17.00 "Тысяча и одна роль Армена Джигарханяна"
18.00 "Лед и пламень".
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.10 Познер"
00.00 Футбол. Чемпионат России. XXIII тур. ЦСКА - "Ростов"
02.00 "Мексиканец". Комедия
04.10 "Спасите Грейс"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.25 "Снайпер". Драма
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Костяника. Время лета". Мелодрама
10.25 "Утренняя почта"
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести-Башкортостан". События недели"
11.55 "Городок"
12.25 "Алина". Фестиваль детской художественной гимнастики
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.30 "Все звезды "Новой волны" в Артеке"
18.00 "Гувернантка". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Моя любовь"
23.15 "Специальный корреспондент"
00.15 "33 веселых буквы"
00.45 "Головокружение". Боевик
02.30 "Хостел". Фильм ужасов
04.15 "Городок"

### НТВ

06.05 "Люди Икс: эволюция"
06.55 "Сказки Баженова"
07.25 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Спето в СССР"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски. Зубные рвачи"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.50 "Дорожный патруль". Детективный сериал
23.45 "Нереальная политика"
00.20 "Авиаторы"
00.55 "Пункт назначения-2". Фильм ужасов
02.40 "Гнев". Драма
04.55 "Очная ставка"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Автолегенды"**
**08.40 Мультфильм**
**10.00 "Сулпылар"**
**10.20 "Семер"**
**10.35 "Байтус"**
**10.50 "Артылыш"**
**11.15 "Учим башкирский язык"**
**11.30 "Телекомпас"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Бабушкин сундучок"**
**13.00 "Дарю песню"**
**14.05 "Млечный путь". Памяти народной артистки СССР З. Насретдиновой**
**15.00 Художественный фильм**
**16.50 "Аксаковская осень"**
**17.20 "Галерея изящных искусств"**
**17.45 "В центре внимания"**
**18.10 "Байык" (на башк. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.05 "Вечер.com"**
**22.50 Приключенческое кино**
**01.50 Прогноз погоды**

*ИҒЛАН*

Халыҡ-ара кимәлдәге **(Cambridge, ICELT)** тәжрибәле уҡытыусы, РФ дөйөм белем биреү алдынғыһы, инглиз теле уҡытыусыларының Рәсәй-Америка конкурсы **(TEA, 2001)** еңеүсеһе **инглиз телен** өйрәнергә теләүселәрҙән төркөм (6-9 кеше) йыя. Дәрестәр автор программалары буйынса үткәрелә.

**Тел.: 8-917-43-47-270, 256-98-04.**

*✓ Әгәр беҙ был тауҙы емерергә юл ҡуябыҙ икән, беҙ тәбиғәтте генә түгел, шул уҡ ваҡытта этносты, мәҙәниәтте, халыҡтың рухын да емерәсәкбеҙ.*



БЕРҘӘМЛЕКТӘ - КӨС

# ТОРАТАУ ТОРАСАҠ ҺӘМ...

## был биләмәлә биологик, экологик, геологик, этно-мәҙәни ҡурсаулыҡ буласаҡ!

**(Башы 1-се биттә).**

**Рәшит ШӘКҮР, яҙыусы, профессор, йәмәғәт эшмәкәре:** Республикала нәҡ ошо тауҙы яҡлап халыҡ хәрәкәте башланыуы бер ҙә осраҡлы түгел. Элек был шихандар дүртәү ине, хәҙер улар өсәү ҡалды. Халыҡ күтәрелеп сыҡмаһа, тәбиғәт ҡомартҡылары шулай берәм-берәм юҡҡа сығыуы ла мөмкин. Ә бит был шихандар донъя кимәлендә иң элек геологик ҡомартҡы булараҡ ҙур ҡиммәткә эйә. Был тауҙарға 250 миллион йыл бар, тип уҡығаным бар. Улар диңгеҙ төбөндә риф массивтары булараҡ барлыҡҡа килгән. Ә бындай риф массивтары, әйтәйек, Тымыҡ океан буйҙарында, Австрия яҡтарында әле лә бар. Риф массивтары диңгеҙ ҡабырсаҡтарынан ҡорола, шунан эзбиз ташҡа әйләнә. Геологик ҡомартҡы булараҡ, геологтар был тауҙарҙы бик юғары баһалай. Хатта 30-сы йылдарҙа Бөтөн донъя геологик конгресында ҡатнашыусы ғалимдар ошо тауҙарҙы махсус рәүештә килеп күргән. Шулай уҡ был тауҙарҙы XVIII быуатта рус ғалимы һәм сәйәхәтсеһе Иван Лепехин килеп күргән. Ул был тауҙарҙың, бигерәк тә Торатауҙың, башҡорттар өсөн изге икәнлеген төрлө дәлилдәр менән нығытып яҙып ҡалдырған. Был тау менән башҡорт халҡының бик күп легендалары, ышаныуҙары, йолалары, байрамдары, тарихы бәйле. Был тауҙарҙа беҙҙең әүлиәләребеҙ ерләнгән, шуға күрә уның ташын да алырға ярамай. Һәм уның изге булыуы дини ышаныуҙарға ғына түгел, ә халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тәжрибәһе, күҙәтеүҙәре, уның тәбиғәт тураһындағы белемдәренә лә нигеҙләнгән. Халҡыбыҙ тәбиғәтте бик ятраҡан һәм тәбиғәт серҙәрен яҡшы белгән. Бар шундай тауҙар - уларға тейергә ярамай. Әйтәйек, бына яңыраҡ Мөжәүир хәҙрәт тураһында уҡығайным. Ул үҙенең тыуған ауылы Маҙһар янындағы бер тауға күрһәтеп, уға тейергә ярамай, юғиһә, бәлә-ҡаза киләсәк, тип әйтеп ҡалдырған. Әүлиәләребеҙ әйтеп ҡалдырғанса, Торатауға ла тейергә ярамай, был киләсәк өсөн хәүефле. Ошонда халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тарихы һаҡланған, ошонда халыҡ йыйылып, фекер туплаған, йыйындар үткәргән, рухын берләштергән. Шуның өсөн дә быйыл Салауат байрамы ла бында үткәрелде, ырыуҙар ташы ҡуйылды, башҡорт ырыуҙарына арналған мемориал комплекс төҙөү маҡсат итеп ҡуйылды. Беҙ Торатауҙы яҡлайбыҙ, беҙ уның һағында торабыҙ һәм торасаҡбыҙ.

**Әхәт ШАҺИЕВ, БР тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары:** Торатау һәм уның тирә-яғындағы башҡа шихандар айырыуса һаҡланыусы тәбиғәт ҡомартҡылары исемлегенә инә һәм закон буйынса унда геологик разведка (фәнни яҡтан өйрәнеүҙән тыш), мал көтөү, дарыу үләндәре йыйыу һәм башҡа эштәр башҡарыу тыйыла. Изге тауыбыҙ киләсәк быуындар өсөн һаҡланырға тейеш. Министрлығыбыҙ Торатауҙы сеймал булараҡ файҙаланыуға ҡырҡа ҡаршы сығыш яһай. Беҙ уны тәбиғәт ҡомартҡыһы булараҡ һаҡлау яғындабыҙ. Республикала айырыуса һаҡланған тәбиғәт ҡомартҡыһы булмаған сеймал базалары етерлек. Беҙ халыҡ фекерен республика етәкселегенә еткерәсәкбеҙ...

**Гүзәл СИТДИҠОВА, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ойошмаһы рәйесе:** Торатау бит башҡорт халҡы өсөн ябай ғына тау түгел: был тау менән уның рухы, күңеле бәйле. Мөһабәт Шах-тауыбыҙҙы бөтөрҙөләр инде, ә хәҙер бына "йөрәге"нә тотонорға торалар. Был беҙҙең рухиәтебеҙҙең йөрәгенә тотондолар, тигән һүҙ ул. Шуның өсөн дә күңелдә әрнеү тыуа: оҙаҡ та үтмәй, ошо тау юҡҡа сығыр ҙа, урынында соҡор ғына ҡалыр, ә беҙҙең легендаларҙы уҡып ейәндәребеҙ: "Ҡайҙа ул Торатау?" - тип һорар. Шахтауҙы инде улар таба алмаясаҡ. Әгәр Торатауҙың урынында соҡор ғына ҡалһа, был беҙҙең киләсәк быуынға рухи өлкәлә лә бер нәмә лә ҡалдырмауыбыҙҙың күрһәткесе буласаҡ.

Юҡ, беҙ "Сода" комбинаты эшселәрен эшһеҙ ҡалдырыу яғында түгелбеҙ, ә бары тик тәбиғи ҡомартҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға ғына теләйбеҙ. "Сода"ға яраҡлы ҡаҙылдыҡтар бында ғына түгелдер бит. Сәнәғәтселәр сеймалдың эргәлә генә булыуына ҡыҙыҡһалыр, аҙ аҡса һалып, күберәк файҙа алырға тырышалыр. Был осраҡта мин тауар хаҡы артҡан һайын, арзаная кеше хаҡы, тип әйтә алам. Халыҡтың рөхсәтен һорамайынса, тауҙы емереү - әхлаҡһыҙлыҡтың иң юғары нөктәһелер, тип һанайым. Әгәр бөгөнгөбөҙҙө ашап бөтөрһәк, киләсәгебеҙгә нимә ҡалдырабыҙ? Беҙ ошо хаҡта уйларға тейешбеҙ. Бер тауҙың урынын икенсе тау бер нисек тә алмаштыра алмай. Тәбиғәттең һәр мөғжизәһе ҡабатланмаҫ бит ул. Магнитогорскиҙа Әтәс тауын бөтөрҙөләр, хәҙер ул тауҙың урынында соҡор ғына ҡалды. Ә кешеләргә шул тау емерелеү арҡаһында күпме ауырыуҙар килде. Был бит сәләмәтлек менән дә бәйле, ерҙә бит бөтә нәмә лә осраҡлы ғына барлыҡҡа килмәгән. Ололарҙың әйтеүе буйынса, был тау һыу ятҡылығы менән бәйле. Ҡөрьәндә лә һыу таштан яралтыла, тип әйтелә. Бәлки, бында ла һыу яралта торған таштарҙыр - беҙ бит белмәйбеҙ. Тәбиғәттең серенә бер ҡасан да төшөнөп булмай, тимәк, ниндәйҙер хәүеф бар икән, өлкән быуындар ярамай, тип әйтеп ҡалдырған икән, беҙ ҡолаҡ һалырға, тәбиғәтте аңларға тырышырға тейеш. Мәҫәлән, ололар Ямантауға тейһәң - ут сығыр, тип әйтер ине һәм, ысынлап та, уның эсен ҡыуышландырыу менән Инйәр туңмай башланы. Тәбиғәттә бындай күренештәр күп.

**Сибәғәт РАХМАНҒОЛОВ, журналист:** Бөгөн халыҡтың Торатау буйында йыйылыуы уны һаҡлап ҡалыу юлында беренсе аҙымдар ғына, тип һанайым. Киләсәктә күп эштәр башҡарырға, һүҙебеҙҙең дөрөҫлөгөн иҫбат итергә, хоҡуғыбыҙҙы яҡларға тура киләсәк. Беҙҙең халыҡты ҡуҙғытып ебәрергә генә кәрәк бит ул, әгәр халыҡ күтәрелһә, кирелһенсә, уны туҡтатыуы ҡыйын буласаҡ. Шуға күрә, бөгөнгө көндә Торатау мәсьәләһе ысынлап та бик киҫкен тора икәнен халҡыбыҙҙың бик әҙ өлөшө генә аңлай, төшөнә, тип уйлайым. Ә беҙҙең бурыс - бына ошо мәсьәләгә халыҡтың иғтибарын йүнәлтеү. Торатауҙы һаҡлау өсөн һәр башҡорт үҙ өлөшөн индерергә тейеш. Шул саҡта уларға башҡалар ҡушылыр, тауыштарыбыҙ Торатау кеүек ҡалҡыр.

**Татьяна ҠАДЫРОВА, Ишембай ҡалаһының 11-се мәктәп уҡытыусыһы:** Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа ғына әллә күпме тәбиғи ҡомартҡы юҡҡа сығарылды - быны беҙ белмәйбеҙ генә. Торатауҙы һаҡлап ҡалыу өсөн, уның ҡурсаулыҡ статусы алыуы мөһим - ул саҡта уға бер кем дә тейә алмаҫ. Ә уны ҡурсаулыҡ итер өсөн геологик һәм биологик күҙлектән ҡарағанда тулы хоҡуғыбыҙ бар. Бында үҫкән үҫемлектәр үҙенсәлекле - улар боҙлауыҡ осоро ваҡытында ла булған һәм башҡа бер ерҙә лә үҫмәй, сөнки бындай тупраҡ башҡа ерҙә юҡ. Был үҫемлектәр Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Ғөмүмән, был шундай үҙенсәлекле геологик система. Һуңғы йылдарҙа Торатау тирәһен ял итеүселәрҙең ҡыйлап китеү осраҡтары күбәйҙе, хатта шундай битараф кешеләрҙең һүндерелмәй ҡалған усаҡтары арҡаһында янғын да сыҡҡылаҡаны. Әгәр беҙ был урындарҙы ҡурсаулыҡ биләмәһенә индерһәк, бындай аяуһыҙлыҡтарҙан ҡотоласаҡбыҙ. Был тауҙың биоэнергетикаһы ла үҙенсәлекле. Хатта оло юлдан үтеп барғанда ғына ла тауға ҡараһаң, йөрәктә ниндәйҙер тулҡынланыу барлыҡҡа килә, ошо тауҙан көс алғандай булаһың. Шул уҡ ваҡытта уны этнотарихи мәҙәниәт ҡомартҡыһы, тип тә ҡарарға була, сөнки был башҡорт халҡының изге тауы. Әгәр халыҡ уны Изге тау тип тапҡан икән, тимәк, ниндәйҙер нигеҙләнеүҙәр ҙә бар. Әгәр беҙ был тауҙы емерергә юл ҡуябыҙ икән, беҙ тәбиғәтте генә түгел, шул уҡ ваҡытта этносты, мәҙәниәтте, халыҡтың рухын да емерәсәкбеҙ. Беҙгә Торатау биологик, экологик, геологик, этномәҙәниәт ҡурсаулыҡ булһын өсөн көрәшергә кәрәк.

**Зилә БИКТИМЕРОВА, уҡытыусы:** Илдә тәбиғәткә ҡырағайҙарса ҡул һуҙыу дауам итә, әле бер урында тау емерәләр, икенсе урында урмандарҙы ҡырып һалалар. Кешелек донъяһы юғарылығынан ҡарағанда, Торатау "Сода" предприятиеһы өсөн "бер ҡабымлыҡ" - 30-40 йылға ғына етерлек сеймал сығанағы. "Бер ҡабым" өсөн тау һынлы тауҙы юҡ итергә нисек аҡылы етә икән ҡайһы берәүҙәрҙең? "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау тураһында" Федераль закон /2001 йылдың 20 декабрендә ҡабул ителгән/ ни өсөн, кем өсөн сығарылған? Унда "Бөтөн донъя тәбиғәт һәйкәлдәре исемлеге"нә ингән ҡиммәттәргә теймәҫкә, тип асыҡ әйтелгән. Торатау был исемлеккә күптән индерелгән. "Сода" предприятиеһы етәкселеге уны белмәйме икән ни?

**Фирҙәүес БӘШИРОВА, Татарстан башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Татарстан башҡорттары ла Торатау яҙмышы өсөн бик борсола. Халҡыбыҙҙың ҡомартҡыһы, байлығы булған Торатау мәңге йәшәргә тейеш, тип һанайбыҙ беҙ. Уйлап ҡараһаң, сәнәғәт предприятиелары өсөн бер ҡасан да сеймал етмәйәсәк. Ниндәйҙер килем өсөн шундай мөһабәт тауҙы емереп, ә һуңынан 15-20 йыл ғына файҙаланып, урынына соҡор ҡалдырыу - ул башҡа һыймаҫлыҡ вәхшилек. Был халҡыбыҙҙы бушлыҡҡа алып барыу тигән һүҙ. Әгәр был юлы Торатауҙың емерелеүенә юл ҡуйһаҡ, икенсе юлы башҡа тауҙарыбыҙҙы ла емерәсәктәр. Шуға күрә беҙ бөгөн был тауҙы һаҡлау өсөн ҡалҡандай ҡалҡырға тейешбеҙ.

**Сәғит ИСМӘҒИЛЕВ, эшҡыуар:** Торатау әүлиәләр ерләнгән ер. Уларҙың ҡәбер таштары ла һаҡланып ҡалған. Бындай изге урындарға зыян килтерһәң, ул үҙеңә мең афәт булып кире әйләнеп ҡайтасаҡ. Шуға күрә ата-бабаларыбыҙ: "Әүлиәләр ерләнгән ерҙәргә тейергә ярамай", - тип әйтеп ҡалдырған. Хәтерҙә, Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөргә ҡарар ителгәс, Мәләүез районының Һыртлан ауылынан бер инәй: "Һыуһаҡлағыс төҙөлмәйәсәк, сөнки был ерҙәргә әүлиәләр күмелгән" , - тигән фараз әйткән. Һыуһаҡлағыс төҙөлөшө башланған ерҙән туҡтатылды һәм баяғы инәйҙең фаразы дөрөҫкә сыҡты. Бында ла әүлиәләр рухы Торатауҙы ватырға ирек бирмәҫ, тип ышанам. Ә шулай ҙа быға халыҡтың ярҙам итеүе лә кәрәк.

**Шулай итеп...**

**Акцияла ҡатнашыусылар республика, ил етәкселегенә мөрәжәғәт ҡабул итте, ҡултамғалар йыйҙы һәм бындай сараларҙы Торатауҙың яҙмышы ыңғай хәл ителгәнсе дауам итергә, тигән ныҡлы ҡарарға килде. Ошо сарала ғына "Торатауҙы "Сода"нан яҡлайбыҙ!" тигән текст аҫтына өс меңләп кеше ҡул ҡуйҙы, унан алда район энтузиастары тарафынан ете меңләп кешенең ҡултамғаһы йыйылғайны. "Ошо ерҙә 250 миллион йыл торған Торатауыбыҙ киләсәктә лә торасаҡ һәм был биләмәлә биологик, экологик, геологик, этно-мәҙәни ҡурсаулыҡ буласаҡ!" тигән берҙәм теләктә таралышты сарала ҡатнашыусылар. Уларҙың был теләк көсө Юғары көскә барып тоташҡандыр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.**



**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



КИТАБЕННАС

# ҺӘЗИӘ АПАЙЫБЫҘҒА АРНАП...

## әйтер һүҙҙәр алда булыр әле

**Ошо көндәрҙә Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Һәзиә Дәүләтшинаның тормошо һәм ижадына арналған китап-альбом (төҙөүсеһе - Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты Ҡаҫҡынова Гөлнур Нуриман ҡыҙы) баҫылып сыҡты. Башҡорт һәм рус телдәрендә 2000 дана тираж менән баҫтырылған китап киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнгән.**

- Был хеҙмәт Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһында урынлашҡан музейҙы реставрациялау, экспозицияны байытыу, шул эштәр нигеҙендә йыйылған мәғлүмәтте республика уҡыусыһына еткереү ихтыяжынан килеп тыуҙы, - ти баҫманың төҙөүсеһе. Китап-альбомда башҡорт халҡының күренекле әҙибәһе, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Һ.Дәүләтшинаның тормошо һәм ижадына бағышланған бик күп мәғлүмәттәр, мәҡәләләр, архив материалдары, иҫтәлекле фотолар, замандаштарының әҙибә тураһындағы яҡты хәтирәләре тупланған. Шулай уҡ бында әҙибәнең яңыраҡ табылған шиғырҙары ла лайыҡлы урын алған. Замнында Һәзиә Дәүләтшина йәшәп киткән ауылдар буйлап йыйып алынған, бығаса бер ҡайҙа ла баҫтырылмаған фотоһүрәттәр баҫмаға айырым бер мәртәбә өҫтәй.

Халыҡ үҙенең данлыҡлы ҡыҙын онотмай, уның исемен мәңгелләштереү маҡсатында бигерәк тә Бөрөлә байтаҡ эштәр башҡарыла. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһынан сыҡҡан беренсе яҙыусыға беренсе һәйкәл дә тап ошо ҡалала ҡуйыла. Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы коллективы тарафынан 1980 йылда Һ. Дәүләтшинаға арналған музей асыла. Әлеге альбомда Һәзиә Дәүләтшинаның Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһындағы кабинет-музейынан, "Баймаҡ тыуған яҡты өйрәнеү" мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеһының "Сиҙәм музейы" филиалынан, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге архивынан алынған ҡыҙыҡлы материалдар файҙаланылған. Гөлнур Нуриман ҡыҙы әйтеүенсә, башҡорт халҡының данлыҡлы ҡыҙы Һәзиә Дәүләтшина тураһында әйтер һүҙ был хеҙмәт менән генә тамамланмай. Китап-альбом төҙөүсенең халыҡ менән, әҙибәнең яҡындары, замандаштары менән осрашҡан саҡтағы алған тәьҫораттары тураһында уртаҡлашаһы, әйтер һүҙе бар әле.

**Миләүшә СӘЛИХОВА.**

АФАРИН!

**Яҡташыбыҙ, күренекле журналист, тыуған яғыбыҙҙың ялҡынлы патриоты, "Йәшлек" гәзитенең Көньяҡ Урал районы буйынса үҙ хәбәрсеһе Юлай Хөрмәт улы Мәҡсүтовтың баҡыйлыҡҡа күсеүенә дүрт йыл булып китте. Уның ғүмере ҡыҫҡа булды, әммә башҡарған эштәре менән туғандарының, дуҫтарының, гәзит уҡыусыларҙың күңел күгендә ҡабатланмаҫ бер йондоҙ булып уйылып ҡалды.**

# ЮЛАЙ МӘҠСҮТОВ ПРЕМИЯҺЫ-

## беҙҙең авторыбыҙға

Юлай Мәҡсүтовтың исемен мәңгеләштереү, йәш журналистарҙы уның егәрлелек һәм талант өлгөһөнә әйҙәү, дәртләндереү маҡсатында Баймаҡ биләмә-ара үҙәк китапханаһы уның исемендәге район журналистика премияһын булдырғайны. Былтыр премия уның беренсе лауреаты - "Баймакский вестник" гәзите хәбәрсеһе Зөлфиә Сафинаға тапшырылды. Ә инде журналистика премияһының икенсе лауреаты исеменә районда ғына түгел, республикала үҙ уҡыусыларын тапҡан "Һаҡмар" гәзитенең хаттар һәм социаль тормош бүлеге мөдире Гүзәл Иҫәнгилдина лайыҡ булды.

Гүзәл Салауат ҡыҙы "Киске Өфө гәзитенең дә әүҙем авторы. Уҡыусыларға ул башлыса ғибрәтле ваҡиғаларға нигеҙләнеп тәрбиәүи һығымталар яһаған сығыштары аша таныш. Премияны тапшырыу тантанаһында район гәзитенең ветеран-журналисы Тәфтизан Ушанов шулай тине: "Гүзәл "Һаҡмар" гәзитенә эшкә килеү менән уның аҡ йондоҙона әүерелде. Кешеләрҙең уның мәҡәләләрен түҙемһеҙләнеп көтөп алыуы, декрет ялы ваҡытында уны таптырып бер булыуы, йыш ҡына "Гәзитегеҙҙе Г. Иҫәнгилдинаның мәҡәләләрен уҡыу өсөн генә яҙҙырабыҙ", тип белдереүе Гүзәлебеҙҙең ижадына иң ҙур баһа ул". Был һүҙҙәр йәш журналистың теләһә ниндәй премияларға ла лайыҡлы икәнен тағы бер тапҡыр иҫбатлай.

Юлай Мәҡсүтовтың премияһы фондын мәрхүм журналистың туғандары ойошторҙо. Улар әйтеүенсә, яҡын кешеләренең исеме мәңгеләштерелеүе, Баймаҡ журналистарының ошо исемгә лайыҡ булыу өсөн тырышып ижад итеүе ҙур ғорурлыҡ тойғолары ята.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА.**

**Баймаҡ районы.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# КҮП ЙӨРӨМӘ ҺӘПТӘҢНӘП...

**"Оҙанлау".** Бушҡа ваҡыт үткәреп, ырғыпһикереп, эшһеҙ йөрөгән ҡыҙ балаларға ҡарата әйтә әсәйем: "Оҙанлашып йөрөгәнсе, бар, ана, картуф утағыҙ".

**"Сипранлау".** Юҡ-барға ризаһыҙлыҡ белдереп, мыжып, юҡтан ғәйеп табып йәки ирешталаш ҡуҙғытып йөрөүсе бисәләргә ҡарата әйтелә.

"Сипранлап йөрөмәһен, үҙен белһен".

**"Мөжөлдәү".** Әлегесә ризаһыҙлыҡ белдереп, мыжып йөрөү. "Мөжөлдәп ҙә йөрөр инде ошо"...

**"Украт"** - теп-теүәл; туп-тура тигәнде аңлата. "Украт ярты кило" йәки "Украт үҙенә тап булдыҡ".

**"Эт ҡаныйˮ** - ни менәндер мәж килеү, күңелдәре булғансы, туйғансы тигәнде белдерә. "Кеше донъяһына эт ҡаный булдылар, әйтәүер". Кире мәғәнәлә.

**"Сәпәнләү"** - һаранланыу йә булмаһа эшләр-эшләмәҫ йыбанып тороу. "Сәпәнләмә, күберәк һал әйҙә", - тиҙәр.

**"Арманһыҙ"** - ныҡ арыу, йонсоу. "Арманһыҙ булып ҡайтып йығылдыҡ".

**"Әштер-өштәр итеү"** - ни менәндер мәшғүл булыу, ары-бире ниҙер эшләп алыу. "Әбейе усаҡ янында әштер-өштәр килә".

**"Һәрмәнеп алыу"** - тамаҡ туйҙырыу, аяғөҫтө генә ҡапыл-ҡапыл ҡапҡылап алыу. Бесән сабып туҡтайбыҙ, атай ҡайтырға ат егә. Шул саҡ әсәй сумкалан ҡалған икмәк, картуф, ит киҫәктәрен сығара, айран һыулай ҙа: "Әйҙәгеҙ, ҡайтып еткеләгәнсе, әҙерәк һәрмәнеп алығыҙ" - ти, үҙе көлә.

**"Хәмсеү"** - урлау, сәлдереү. "Ҡайҙан хәмсенең быны?" - тиҙәр.

**"Һәптән"** - күп йөрөгән кешегә әйтәләр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәкикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАҘ ҠАҘЫҺАҢ...

## икене ҡаҙы

Күрер күҙең күрмәҫ була килер ҡаза булғанда.

Биш иҫәргә кәңәш иткәнсе, бер аҡыллыға кәңәш ит.

Иҫәр менән бал ашағансы, аҡыллы менән таш ташы.

Аҡылһыҙ кеше дошманы менән дуҫ булыр, дуҫы менән дошман булыр.

Байтирәктең ҡыҙығын ыжылдаған ел күрә, айҙай күлдең ҡыҙығын ҡаңғылдаған ҡаҙ күрә.

Иленән биҙгән ир уңмаҫ, күленән биҙгән ҡаҙ уңмаҫ.

Астан ҡаҙан аҫтырма, туҡтан туҡмас киҫтермә.

Ҡатын ҡәрҙәше ҡаҙан янында, ир ҡәрҙәше ишек төбөндә.

Сәскәһенә алданып, сәнскеһенә ҡаҙалма.

Ҡаҙна малы ҡоҫтороп, ҡоҫтормаһа - боҫторор.

Баҙ ҡаҙыһаң, икене ҡаҙы, береһе үҙеңә булыр.

Ҡаҙынған ҡарға ҡар өҫтөнән ҡалъя тапҡан, ҡаҙынмаған- ҡар өҫтөндә ҡатып ятҡан.

Кеше ҡайғыһына ҡыуанма, ҡыуанысына ҡыуан.

Кешене эш бөтөрмәй, ҡайғы бөтөрә.

Шатлығыңды шатланышырлыҡ кешегә, ҡайғыңды ҡайғырышырлыҡ кешегә һөйлә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:"Бер һалдат аҡһаҡал янына килә һәм унан: "Тере донъяла Ожмах һәм Тамуҡ бармы, әллә был юҡ һүҙме?" - тип һорай."Ә һин кем булаһың?"- ти уға аҡһаҡал. "Һалдат" -ти егет. "Һалдат? - тип аптыраған тауыш менән ҡыҫҡырып ебәрә аҡһаҡал. - Һине кем һалдат итеп ялланы? Һин бит урам буйында йөрөгән бер асарбаҡҡа оҡшағанһың..." Һалдат, ҡотороп, ҡылысына тотона. "Ә-ә-әә, һинең ҡылысың да бармы ни әле? - ти аҡһаҡал уны юрый үсектереп. - Ул, моғайын да, үҙең һымаҡ тупаҡтыр, минең башты өҙөргә лә эшкинмәҫ..." Ярһыған һалдат ҡылысын өҫкә күтәреп, һелтәнергә генә әҙерләнгәндә, аҡһаҡал уға ҡарап йылмая ла: "Бына ошо ерҙә Тамуҡ ҡапҡаһы асыла...- тип бышылдай. Был һүҙҙәр һалдатҡа шул тиклем ныҡ тәьҫир итә. Ул ҡылысын йәшерә лә, ҡарт алдында хөрмәт менән баш эйә. "Бына шулай Ожмах ҡапҡаһы асыла..." - ти шунан аҡһаҡал".

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәррирәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3825